*✓ Команда уңыш яулаһа, ғәҙәттә, тренер тураһында оноталар. Ә инде команда уңышһыҙлыҡҡа осраһа, тренерҙы иҫкә төшөрәләр.*

*(Йәшәйеш аҡылы).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 МАРТ (БУРАНАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№11 (429)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙгә анра...**

әммә сәләмәт балалар кәрәкме?



5

**Ерҙең дә хәтере бар,**

уның да түҙемлеге сикһеҙ түгел...



6

**Хоккей буйынса чемпиондар...**

ауылдарҙан да юл башлай



8-9

**Туниста - "финик революцияһы",**

ә Ливияла...



15

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Төҙөкләндереү, асфальт юлдар һалыу, газ, телефон үткәреү менән генә ауылдарҙы һаҡлап ҡалып буламы?

*Спартак ИЛЬЯСОВ, яҙыусы, халыҡ йырауы, Учалы районы Аҡһаҡалдар ҡоро рәйесе:* Ошондай заманда йәшәп тә, Рәсәйҙең күпселек ауылдарының асфальт юлы, газы, телефоны булмаһас, артабан булырмы ла, ғөмүмән, Рәсәйгә ул ауылдар кәрәкме икән? Улай ғына ла түгел, илебеҙҙә барған үҙгәрештәрҙе һылтау итеп, ауылдарҙың төп үҫеш нигеҙе булған колхоз-совхоздарҙы ла емерҙеләр. Дәүләт был мәсьәләләргә йөҙө менән боролоп, айырым программа ҡабул итеп, иң тәүҙә ауылдарҙа эш урындары булдырыуҙы төп мәсьәлә итеп ҡуймаһа, Рәсәй ауылдары юҡҡа сығасаҡ. Рәсәй ауылдарының юҡҡа сығыуы һуңғы сиктә дәүләтте лә тарҡатасаҡ. Рәсәй аграр ил булып барлыҡҡа килгән икән, уның киләсәге лә ошо нигеҙҙә һаҡланырға тейеш. Ауылдарҙы күтәреү мәсьәләләрен һәр береһен айырым ҡарап булмай, бында комплекслы ҡараш, бер һүҙ менән әйткәндә, илгә яңы аграр реформа кәрәк. Рәсәйҙең киләсәге - аграр реформала. Ауыл хужалығын рентабелле эшләтеү механизмдары ла төптән уйланылырға тейеш. Бөгөн илебеҙ газ, нефть һатҡан аҡсаға сит илдән аҙыҡ-түлек һатып алып, илде туйҙыра. Әммә газ менән нефть мәңгелек түгел, уларҙың да сиге бula. Ул сағында инде ил карабының төбө ҡомға терәләсәк. Бына ошондай күңелһеҙ хәлдәр булмаһын өсөн әле илдең биле ныҡ саҡта ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырып ҡалыу фарыз. Ни өсөн тигәндә, һәр Рәсәй гражданы көнөнә өс тапҡыр туҡлана икән, икмәкте ҡала фатирының балконында йә ҡала асфальтында үҫтереп булмай. Совет осорон нисек кенә әрләмәһендәр, беҙҙе үҙебеҙҙең ауылдар туйындырҙы. Ҡала халҡы үҙебеҙҙең ауылдар етештергән аҙыҡ-түлекте һатып алды һәм шул аҡса ауылдың иҡтисад һәм социаль мәсьәләләрен хәл итеүгә тотонолдо. Бөгөн беҙҙең ҡалалар сит илдәрҙең, атап әйткәндә, Европаның һәм Канаданың фермер хужалыҡтарын үҫтереүгә булышлыҡ итә. Ауылды күтәреүҙең механизмы бик ябай ғына: ул етештергән продукцияны ҡалалар һатып алырға, унан килгән аҡса ауылды төҙөкләндереүгә китергә тейеш.

Рәсәй газы һәм нефте ер аҫтындағы ҡалын торбалар аша бер туҡтауһыҙ Европа илдәренә ағып ята, әммә бына беҙҙең Учалы ҡалаһынан Миәскә тиклемге араlыҡтағы утыҙлаған ауылға газ һаман да үткәрелмәгән. Газ ауылдарға килгән хәлдә лә, уны һәр йортҡа үткәреү өсөн дә, аҙаҡ газ ҡулланыуға түләү өсөн дә аҡса кәрәк. Бының өсөн ауыл халҡына эш урыны кәрәк. Әлеге лә баяғы бер үк ҡулсаның осона барып сығабыҙ.

*Бикйән КАМАЛЕТДИНОВ, Баймаҡ районы Темәс ауылы биләмәһе башлығы:* Беҙҙең Темәс ауыл биләмәһендә 3600 кеше йәшәп, шуларҙың эш менән мәшғүл булғандарынан 430 кеше психоневрология интернатында, 120 кеше кирбес заводында, 300-ләп кеше шәхси таҡта ярыу цехтарында эшләй. Беҙҙең ауыл биләмәһенең һөрөнтө ерҙәренең дүрттән бер өлөшөн фермерҙар эшкәртә, бер өлөшөн "Урал аръяғы" МТС-ы арендалай. Һуңғы йылдарҙа йәйҙәр ҡоро килеү арҡаһында фермерҙар ҙа, МТС-та йүнләп уңыш йыйып алғаны юҡ. Темәс ауылының тик бер өлөшөнә генә газ үткән, ауылыбыҙ район үҙәгенә асфальт юл менән тоташҡан.

Ә инде ҡуйылған һорауға килгәндә, әгәр ҙә ауыл халҡы эш менән тәьмин ителмәһә, базовый ауыл хужалығы предприятиеһы, колхоз йә совхоз булмаһа, социаль объекттар, асфальт юлдар, газ, телефон селтәрҙәре 10-15 йылдан эшлектән сығасаҡ. Уларҙы ҡараусы, ремонтлап тороусы ла кәрәк бит. Яҡшы, етеш, комфортлы тормоштоң нигеҙе иҡтисад тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр шул.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ХОККЕЙ*

# ЫСЫН ИРҘӘР ГЕНӘ...

## хоккей уйнай һәм еңеү яулай

**Был көндәрҙә бөтә Башҡортостандың хоккей менән "ауырыуы" тағы ла көсәйҙе, сөнки оҙайлы һәм көсөргәнешле уйындарҙан һуң хоккей буйынса Рәсәй асыҡ Чемпионатының плей-офф уйындары башланды. Көнсығыш Конференцияһында уйнаусы "Салауат Юлаев" командаһының 2007-2008 йылдағы Чемпион сезонынын ҡабатлауын бөтә Башҡортостан ғына түгел, республиканан ситтә йәшәгән барлыҡ яҡташтарыбыҙ ҙа түҙемһеҙләнеп көтә, уйындар барышын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтә.**



**(Дауамы 11-се биттә).**

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АУЫЛЫ БЕРҘЕҢ - ҡәүеме бер...

**Был әйтемде атайым мәрхүмдән ишеттем. "Ауылы берҙең - ҡәүеме бер", тимәк, бер ауылда йәшәүселәр бер милләт кешеләре тип аталырға тейеш. Бик тәрән фәлсәфә ята бында. Хәҙер инде әйтемде үҙебеҙсә тағатып, фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Тәүге тапҡыр был һүҙҙәр ҡасан әйтелде икән? Кешелек ностратик дәүерҙә үтеп, ырыуҙарҙан ҡәүемдәргә, халыҡтарға ойоша башлаған дәүерҙәлер, моғайын. Тәүҙә ҡайһылыр урында йәшәп, аҙаҡ икенсе урынға күсенергә мәжбүр булыусы ырыу, ҡәбилә йә ҡәүем урындағы халыҡтың телен, йолаларын, динен, атап әйткәндә, милләтен ҡабул итергә лә тейеш һәм мәжбүр булғандыр. "Ауылы берҙең - ҡәүеме бер" әйтеме был осраҡта ситтән килеүсе өсөн ҡанун булып һаналғандыр. Әгәр ҙә ошо ҡағиҙә үтәлмәһә, ер йөҙөндә төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙән торған халыҡтар ҙа барлыҡҡа килмәҫ ине. Тимәк, был осраҡта "Ауылы берҙең - ҡәүеме бер" ҡануны кешелектең иң төп байлығы һаналған милләттәрҙе барлыҡҡа килтереүсе төп милли идея ла.

Бик күп ырыуҙарҙы, ҡәбиләләрҙе бер ҡорға бер халыҡ итеп ойоштороусы милләтебеҙ феномены - "башҡорт империяһы" күренеше хаҡында яҙғаным булды гәзиттә. Ысынлап та, милләтебеҙ йөҙҙән ашыу ырыуҙан ойошҡан һәм һәр бер ырыуҙың ер шарының ҡайһылыр төбәгендә ҡандаш милләте бар. "Минең уйымса, нәҡ ошо көньяҡ-көнсығышта йәшәүсе башҡорттарға башҡорт милләте алдында ғына түгел, барлыҡ мосолман донъяһы, кешелек алдында оло миссия һалынған... Был ерҙә йәшәү, ғүмер итеү - өҫтөнлөк түгел, оло яуаплылыҡ..." тигәйне гәзитебеҙҙәге бер сығышында Йылайыр районы Ҡаҙырша ауылы мәсете имам-хатибы Нуретдин олатай Игебаев. Былдай яуаплылыҡ, беренсенән, ошо ергә күмелгән әүлиәләр рухына бәйле булһа, икенсенән, Европа һәм Азия дәүләттәрендә йәшәүсе милләттәрҙең вәкилдәре башҡорт милләте составында йәшәй икән, башҡорт милләтен һаҡлау ул милләттәрҙе лә һаҡлау булып аңлашыла. Шулай итеп, "Ауылы берҙең - ҡәүеме бер" әйтеме Нуретдин олатай әйткән дәлилдәрҙе тағы ла тәрәнерәк итеп асып бирә.

**Әйткәндәй...**

**Немец фашистары барлыҡ совет һалдаттарын да "рус һалдаты" тип атаған. Америкаға барһаҡ, башкортто ла "рашен", Рәсәй буйлап йөрөһәк, "башҡорт" тип атайҙар. Был да шулай уҡ "Ауылы берҙең - ҡәүеме бер" әйтеменең бер сағылышылыр, моғайын. Халҡыбыҙҙағы "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", "Өс көн ҡунаҡ, өс көндән һуң - муйнаҡ", "Ҡунаҡ - хужаның ишеге" ише мәҡәл-әйтемдәре лә ошо әйтемгә бәйле тыуған.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Төҙөкләндереү, асфальт юлдар һалыу, газ, телефон үткәреү менән генә ауылдарҙы һаҡлап ҡалып буламы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәүлит СӘЛИМЙӘНОВ, ауылдан Өфөгә килеп ялланып эшләүсе юғары техник белемле ир-уҙаман:*** Беҙҙең яҡта "Ас булһам да, асфальттан йөрөйөм", тигән бик тапҡыр бер әйтем бар. Тик ас көйө асфальт буйлап оҙаҡ йөрөп булмай икән шул. Ауылда эшең булмаһа ла асыҡмайһың, мал тотоу ҡотҡара, әммә асфальт аяҡ кейемен тиҙ туҙҙыра икән, унда хатта иң арзанлыһы - галуш та түҙмәй. Ә инде яңы аяҡ кейеме һатып алырға аҡса юҡ. Ауылыбыҙ район үҙәгенә асфальт юл менән тоташты, һәр өйгә зәңгәр яғыулыҡ - газ инде, телефон үткәрелде, әммә халыҡ хеҙмәт иткән төп эш урыны булған колхоз емерелгәс, бигерәк тә йәштәребеҙ Силәбе, Магнитогорск, Өфө, Мәскәү ҡалаларына, Себергә эш эҙләп китеп бөттө. Ҡыҫҡаһы, ауылыбыҙҙа үткәрелгән төҙөкләндереү эштәре халыҡты әллә ни ҡыуандырманы. Өҫтәүенә, газ өсөн дә, телефон өсөн дә түләргә кәрәк булып сыҡты. Шулай итеп, элек ике ятып бер төшөбөҙгә инмәгән төҙөкләндереү беҙҙе, киреһенсә, күберәк бурысҡа батырҙы ғына.

Мин үҙем Мәскәүҙә махсус юғары белем алған кеше булараҡ, оҙаҡ ваҡыт колхозда механик булып эшләнем. Колхозыбыҙ емерелеп, эшһеҙ ҡалғас, төрлөсә аҡса эшләргә тырышып ҡараным да, килеп сыҡмагас, баш ҡалабыҙ Өфөгә ялландым. Оҙаҡ ваҡыт эшһеҙ йөрөнөм. Бер ерҙә лә алмайҙар, алғандары ла, төрлө сәбәптәр табып, килешелгән эш хаҡын түләмәй йә йән сыҡмаҫлыҡ ҡына итеп бирә. Әлеге ваҡытта коммуналь хужалыҡында ялланып, баш ҡаланың йорт баштарын ҡарҙан таҙартып йөрөйөм. Бер квадрат метрҙа ҡар көрәгән өсөн 3 һумдан түләйҙәр, йыбанмаһаң, көнөнә мең, мең ярым һум аҡса эшләргә була былай. Бына шулай эштәр. Аҡсаны йорт баштарын "көрәп" алам. Минеңсә, ауылдарҙа бар эштәрҙе төҙөкләндереүҙән түгел, унда эш урындары булдырыуҙан башларға кәрәктер. Хәҙерге ауылдың иң төп проблемаһы унан "тәтәй" һауа түгел, ә халыҡтың ҡулына эш биреү. Кешенең ҡулына тәүҙә эш бирһәң, ул үҙенең йәшәгән урынын былай ҙа тәтәйгә генә түгел, хатта картинкаға әйләндерәсәк. Юғарыла ҡар көрәп йөрөгәндә ана шундай бик ҡыҙыҡ уйҙар килә башҡа. Өҫтән ҡараһаң, донъя матур күренә, күберәк тә нәмәне аңлайһың икән.

***Тимер НИӘТШИН, шағир, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы:*** Хәҙерге ваҡытта һәр бер 100 йорттан торған ауылдың 15-ендә генә хәлле ғаиләләр йәшәй. Хәлле ғаиләләрҙең башлыҡтары ғәҙәттә бюджет өлкәһендә: мәктәптә, балалар баҡсаһында, ауыл хакимиәтендә эшләй йә фермерлыҡ менән шөғөлләнә. Уларҙың ихатаһына барып инһәң, өйө, баҡсаһы, мунсаһы рәтле, аҙбары тулы мал булһа, былдайҙарҙы хәлле ғаиләгә индерергә була. Ә ауылдың ҡалған 85 процент самаһы халҡы саҡ-саҡ осон-оска ялғап көн итә. Ошондай шарттарҙа дәүләт ауылдарҙы төҙөкләндереүгә төп иғтибарҙы йүнәлтеп, унда эш урындары булдырыуҙы күҙ уңында тотмаһа, алға китеш булмаясаҡ. Әгәр ҙә барлыҡ өйҙәрҙә лә ошондай күренеш күҙәтелһен, тиһәк, төнөн урамдарҙа лампалар янып торһон, тиһәк, мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында балалар мыжғып торһон, тиһәк, колонкаларҙағы һыу йыл әйләнәһенә ағып торһон, тиһәк, клубтар, мәҙәниәт йорттары гөрләп торһон, тиһәк, бөтә ауыл халҡы эш менән тәьмин ителергә тейеш. Күпме генә әрләһәк тә, социализмдың иң ыңғай яғы хеҙмәтсәндәргә эш урындары булдырыу ине. Ул саҡта хатта "Әрәмтамаҡлыҡ" өсөн махсус статья бар ине. Ошо статья нигеҙендә бер ерҙә лә эшләмәүселәрҙе яуаплылыҡҡа тарттырып, мәжбүри рәүештә эшкә ҡуша торғайнылар. Элегерәк колхоз-совхоздар балалар баҡсаһын да, мәктәптәрҙе лә аҙыҡ-түлек менән тәьмин итте, мәктәптәргә, клубтарға ремонт үткәрҙе, ауыл халҡына утынбесәнен ташып бирҙе, ҡыҫҡаһы, улар ауылды ҡарап тороусы хужалыҡтар булды. Хәҙер ауылды төҙөкләндереүгә йүнәлдерелгән өмәләр үткәреү йолаһы ла юҡҡа сыҡты. Элек өмәләр үткәреү өсөн материалын бирәләр, өмәлә ҡатнашыусылар өсөн дәртләндереү сараларын күрәләр ине. Былар барыһы ла онотолдо, сөнки ауылды ауыл итеп тотҡан хужалыҡтар - колхоз-совхоздар юҡҡа сыҡты. Ауыл хакимиәттәренең ауыҙҙарын аса, үпкәләре күренеп тора. Ошондай шарттарҙа төҙөкләндереү эшен ойоштороу хәйерсенең ҡулын һоноп һоранып торған һынын ғына хәтерләтә.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# КЕМ АЛЫҠ?



**Хәбәр ителеүенсә, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ март аҙағына тиклем 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙыла ала.**

Март айында 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан берәү **микротулҡынлы мейес** отасаҡ. Уйын апрелдә лә дауам итер һәм, моғайын, ҡатнашыусыларҙы дәртләндерер тағы берәй бүләк тәҡдим итерләр, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Шулай итеп, микротулҡынлы мейесте кем алыҡ? Беҙҙең индекстар:
50665 - алты айға 330 һум 24 тин,
50673 (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 360 һум 24 тин.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә кәңәш ҡорайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә һығымталар яһайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡатнашлығында туризмды үҫтереү мәсьәләһенә арналған кәңәшмә булып үтте. Кәңәшмәлә туристарҙы йәлеп итеүҙең төрлө алымдарын ҡулланыу, мәҫәлән, атлы маршруттар, йылға буйлап ағыу, мәмерйәләр буйлап йөрөү, тау саңғыһы базалары, экологик туризм, йәйәүле маршруттар, билдәле шәхестәр эҙҙәре буйлап маршруттар ойоштороу кәрәклеге тураһында белдерелде. Республика брендын булдырыу тураһында ла һүҙ алып барылды.

✓Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге Башҡортостан Республикаһы дәүләт премияһына күренекле яҙыусы Кәтибә Кинйәбулатова лайыҡ булды. Комиссияның тәҡдимен ҡарап, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ошо хаҡта Указ ҡабул итте.

✓Башҡортостанда Мордва республикаһы көндәре үтте. Сара мордваларҙың Рәсәйгә ҡушылыуының 1000 йыллығына арналды. Мордва республикаһы Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары, мәҙәниәт министры Петр Тултаев етәкселегендәге рәсми делегация мордва мәҙәниәте көндәренә арналған төрлө сараларҙа ҡатнашты, Федоровка һәм Стәрлетамаҡ райондарында булды. Башҡортостанда 26 мең мордва йәшәй. Күпселеге Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Дыуан, Ҡырмыҫҡалы, Дәүләкән, Бишбүләк райондарында төпләнгән. Республиканың 13 мәктәбендә мордва теле уҡытыла, предмет булараҡ телде 442 бала өйрәнә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сәнәғәт, транспорт, төҙөлөш, элемтә һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитеты федераль законға этил спирты миҡдары әҙер продукция күләменең 5 процентын тәшкил иткән алкоголле продукцияны ваҡлап һатыуҙы тыйыуҙы күҙаллаған үҙгәрештәр индереү буйынса федераль закон проектын эшләне. Комитет ағзалары әле Дәүләт Думаһында тикшерелгән закон проектына алкоголле продукцияны ниндәй ҡатылыкта булыуына ҡарамаҫтан төндә һатыуҙы тыйған төҙәтмә индерергә тәҡдим итте.

✓Хәйбулла районында С. Дилмөхәмәтов исемендәге йәш ҡурайсылар бәйгеһе булып үтте. Унда 40-тан ашыу бәйгесе һәм 14 ҡурайсылар ансамбле ҡатнашты. Ошоға тиклем район кимәлендә генә үткәрелгән бәйге был юлы асыҡ конкурс статусы алды һәм унда Баймаҡ, Ейәнсура, Йылайыр райондары ҡурайсылары ла көс һынашты.

ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**Аҡыл бүлешкәндән арта ғына, ти халыҡ мәҡәле. Башҡортостан Президенты үҙ эшмәкәрлегендә халыҡтың был аҡылын бик оҫта файҙалана. Үҙенең блогында ул даими рәүештә теге йәки был тема буйынса республика яҙмышына битараф булмаусыларҙың фекерен белешә, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға тырыша. Уның блогына сығарған сираттағы тема - заманса һәм матур ҡала, ауыл, район үҙәктәре. "Бының өсөн беҙҙә нигеҙ бар, сөнки Өфө, Стәрлетамаҡ, Учалы, Сибай һәр ҡайһыһы үҙ категорияһында илдең иң яҡшы ҡалалары иҫәбенә инә. Район үҙәктәре араһында ла яҡшылары бихисап. Төҙөк ҡасабалар һәм ауылдар ҙа бар. Әммә камиллыҡтың сиктәре юҡ. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа күберәк уңайлылыҡ, ҡала менән ҡасаба араһында айырма тойолмаҫлыҡ булһын ине. Тәҡдимдәрегеҙҙә халыҡ йөшәгән урындарҙа юлдар, парктар, ял итеү зоналары, йылға буйҙары, йәйәүлеләр йөрөгән урындар, пляждар, спорт ҡоролмалары, ихаталарҙы төҙөкләндереү һ.б. тураһында һүҙ барырға тейеш", - ти Рөстәм Хәмитов. Президент блогына күҙ һалып, халыҡтың фекере менән танышайыҡ.**

# ЭШ БУЛҺА...

## аш та булыр, башҡаһы ла

**gal_ramazan.** Һәр ауылда спорт майҙансыҡтары һәм уйын зоналары булған парк төҙөргә. Ауыл тирәһендәге ерҙәрҙе һәм урмандарҙы ауыл советы ҡарамағына тапшырырға һәм уларға "сит"тәрҙе яҡын юлатмаҫҡа. Юҡһа, ауыл эргәһендәге урманды сит-яттар ҡырҡа, ә ауыл халҡы үҙ ихтыяжы өсөн әллә ҡайҙа йөрөргә тейеш була. Тәбиғи һыу сығанағы булмаған ауылдарҙа асыҡ һыу сығанаҡтары- бассейндар булдырырға. Беренсенән, был балаларға һыу инеү өсөн урын, икенсенән, янғын-фәлән сыға ҡалһа, һыу запасы ла.

**partemiy.** Таҙартҡан ерҙә түгел, сүпләмәгән урында таҙа. Мин ауыл мәктәбендә уҡыным. Бер ваҡыт мәктәп директоры линейкала, бөгөндән башлап бөтөн мәктәптә урналар булмаясаҡ, мәктәп сүпләү һәм бысратыу урыны түгел, тип белдерҙе. Ысынлап та, хатта беҙ, балалар, быны аңлаһыҡ һәм был проблема хәлителде, мәктәптә таҙа булып ҡалды (ҡағыҙҙар ҙа, көнбағыш ҡабыҡтары ла юҡҡа сыҡты). Австралия һәм Швеция тәжрибәһе буйынса, әгәр йәмәғәт урынында спиртлы эсемлектәр эсеүсегә йәки тәмәке тартыусыға штраф күләме күтәрелһә, закон боҙорға теләүселәр кәмер ине. Сер түгел, нигеҙҙә, айыҡ булмаған кешеләр бысрата, йәғни һыра эскән йәштәр бәйһеҙгә әйләнә. Ә беҙҙә нимә тыйылмаған, тимәк, рөхсәт ителгән тип ҡабул ителә, сөнки уларҙы бәреү ҙә туҡтатмай, штраф һалмай, шуға һыра банкаларын, сигарет ҡаптарын, тәмәке төпсөктәрен, чипсы тыштарын ҡайҙа теләй, шунда ташлай. Ҡала урамында булһынмы, ауыл урамындамы...

Әгәр иртәгә ҡануниәттә: ниндәй урынды йәмәғәт урыны тип атауҙы аныҡлаһаҡ; ошо йәмәғәт урындарында алкоголь һәм тәмәкене ҡулланыуҙы; мәғариф, мәҙәниәт, медицина, спорт учреждениелары тирәһендә 500 метрлыҡ зоналарҙы закон менән нығытып, уларҙа алкоголь һәм тәмәке һатыуҙы тыйһаҡ, урамдарыбыҙҙың иртәгәһенә үк таҙараҡ буласағына имаһым камил. Беҙҙең халыҡ кеҫәһенә һуҡҡан тыйыуҙарҙы ғына үтәргә күнеккән.

**ruslan_sly.** Халыҡ йәшәгән урындарҙың тышҡы һәм "эске" йөҙөн яҡшыртыу буйынса минең тәҡдимдәрем:

Йәшәү шарттарын яҡшыртыуға средство бүлеү конкурс нигеҙендә үткәрелергә тейеш. Бының өсөн Конкурс тураһында положение эшләргә кәрәк. Конкурс, йәшәгән халыҡтың һанына ҡарап, бер нисә кимәлдә булырға мөмкин. Ниндәйҙер ауыл, ҡала, район айырылып торҙо икән - рәхим итегеҙ, асфальт, башҡаһы, улар өсөн бит лайыҡлы булырға кәрәк. Күптәр һорарға, талап итергә, һоранып алырға күнеккән - улар туранан-тура ҡатнашһын өсөн шарттар булдырырға кәрәк. Финанс дәртләндереүе лә яҡшы булырға тейеш - уға ҡарап башҡалар ҙа әйәрерлек булһын.

Алкоголь продукцияһын һатыу, шулай уҡ тиҙ туҡланыу урындарына ҡаты саралар ҡулланыу. Сер түгел, бындай урындарҙа - төрлө барҙар, рестарандар, кафелар, киоскылар, Макдоналдс һәм башҡалар тирәһендә төрлө сүп-сар даими тулып ята. Алкоголь һатыуҙы ҡала ситенә үк сығарырға, ә эсеүҙе бары тик барҙарҙа ғына ҡалдырырға кәрәк. Әйҙә, бина эсендә эсһендәр, тартһындар, әммә тышҡа алып сығыуға рөхсәт булмаһын. Спорт саралары буйынса иртән күмәкләп гимнастика эшләүҙе индерергә була. Әлбиттә, тәүҙә унда күп кеше булмаясаҡ, әммә был йүнәлештә лә нимәләр эшләргә мөмкин - инструкторҙар билдәләргә йәки былы беренсе пункт Положениеһына индерергә.

**nuriiik.** Ауылдарҙа асфальт түгел, тейешле грунт ҡатламлы юлдар ҙа юҡ. Ауыл батҡаҡҡа һәм һаҙға баткан. Ауылдарға барыр юлдар ҙа юҡ. Һәр ауыл өсөн юлдар эшләр алдынан тәүҙә һыу торбаларын алыштырырға кәрәк. Иҫке торбалар күптән инде серегән. Әлеге ваҡытта был ауыл өсөн иң ҙур проблема - эсәр һыуҙың булмауы. Алкоголизм проблемаһы. Мин үҙем ауылдан, хәҙер студент, шуға был проблеманы үҙ күҙҙәрем менән күреп беләм. Халыҡ ауылдары менән эскегә һалыша. Нимәләр эшләргә, был проблемаға һеҙҙең иғтибарығыҙҙы нисек йәлеп итергә?

**dayan_tuvalbaev.** Күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәр дөйөм милекте - подъездарҙы, урамдарҙы, ҡыйыҡтарҙы, инженер системаларын ремонтлау, уны тотоу өсөн түләй. Ни өсөн ауылда: юлдарҙы, һыу үткәргестәрҙе тотоу өсөн бер нәмә лә түләмәйҙәр. Бары тик ер һалымын ғына түләйҙәр. Һөҙөмтәлә үҙ ихатаһында тулы тәртип, ә урамда - тәртипһеҙлек. Шундай уҡ күренеште ҡаланың шәхси секторында ла, ҡала эргәһендәге ҡасабаларҙа ла күрергә мөмкин. Ауылдарға барып етеү өсөн тәүҙә яҡшы юлдар кәрәк. Былтырғы ҡоролоҡ ауылдарҙың бығаҙер булмауын күрһәтте. Ауылдарҙа һыу менән тәьмин итеүҙең резерв ысулдарын табырға, һыу үткәргестәргә реконструкция эшләргә кәрәк.

**nail_rafikov.** Тема барыһына ла ҡағыла, шуға күрә ул ҡала өсөн генә мөһим түгел. Әлбиттә, беҙҙең сүп-сарҙы Билл Гейтс килеп таҙартмаҫ. Тәжрибә күрһәтеүенсә, проблема кеше ресурсында. Кем таҙартырға тейеш? Хәл итеү юлы бер: һәр кем үҙ йорто тирәһен таҙартырға тейеш (майҙанды билдәләйһең, депутат тикшерә); учреждениелар ҙа үҙ бинаһы тирәһен таҙарта; юлдарға, минеҫә, 3-4 кешене ялларға, уларҙы техника менән тәьмин итергә һәм улар тирә-яғын сабып, сүп-сарҙы йыйып сығасаҡ. Түләү - тирә-яҡты тәртипкә килтереү фондынан; тирә-яҡты тәртипкә килтереү өсөн ныҡлы стимул булып "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" сараһы тора; ни өсөндөр тирә-яҡты тәртипкә килтереүҙә СПК-лар, урман хужалыҡтары ҡатнашмай. Улар хоккей ҡумталарын эшләргә, урман һыҙаттарын ултыртырға ярҙам итер ине. Ҡар тауҙарын үҙебеҙ ҙә эшләй алабыҙ. Парктар төҙөү, асфальт һалыу, кәрәләү, буяу ҙур сығымдар талап итә. Ғөмүмән, төҙөкләндереү буйынса ауыл советтары ныҡлы эшләргә тейеш.

**dacha2010.** Ауыл ерҙәрендә Старосталар институтын тергеҙергә кәрәк. "Ауыл пунктының старостаһы тураһында" положениены эшләргә һәм раҫларға. Ауыл старосталары ауыл сходында һайланырға тейеш, ә хакимиәт башлығы тарафынан тәғәйенләнергә түгел. Һәр ерҙә лә яҡшы лидер кәрәк! Яҡшы лидерҙан башҡа төҙөкләндереү тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел!

Мәктәптәр эргәһендәге барлыҡ спорт майҙансыҡтарын тәртипкә килтерергә. Уларҙа әлегә бер турник һәм уҡыусылар үҙҙәре эшләгән футбол ҡапҡаларынан башҡа бер нәмә лә юҡ. Ауылдарҙың һәр урамында мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн уйын зоналары булдырыуы фарыз.

**ravil1958.** Урындағы совет башлыҡтарына күберәк үҙаллылыҡ бирергә кәрәк, ә улар нимәгә эйә? Ауыл советтары рәйестәре менән бөләкәй генә "түңәрәк өҫтәл" үткәреү зарур, уларҙың һорауҙары күп йыйылған. Рәйес депутаттар менән берлектә үҙ ауыл советының хужаһы булырға тейеш. Һәм тап ул эшләнгән һәм эшләнмәгән эштәр өсөн яуап бирһен. Ауылдағы тәртип һәм тәртипһеҙлек уның ҡулында. Муниципаль ауыл идаралығы өсөн нисек аҡса эшләргә икәнлеген дә белергә, йәғни экономист булырға ла тейештәр. Ауылдарҙағы депутат корпусына ла етди иғтибар бүлергә кәрәк. Юҡһа, кем депутат тип һорайһың, бер кем белмәй.

**ildar_sch.** Ауылдың төп проблемаһы - эш һәм ял итеү урыны, нормаль етәкселектең булмауында. Эшһеҙлектән йонсоған кешеләр йә эсә башлай, йә наркотиктар ҡуллана. Колхоз хеҙмәтенә һәм коллектив тормошҡа өйрәнгән халыҡ яңы тормош шарттарына әҙер түгел һәм ярҙамсыһыҙ ҡалды. Район етәкселеге халыҡҡа ярҙам итеү урынына үҙенең проблемаларын хәл итеүҙе өҫтөн күрә. Йәмғиәт ихтыяжын үҙендекенән өҫтөн ҡуя алмайһың, эргә-тирәндәгеләрҙең хәленә инеү һәләтең, халыҡтың тормошон яҡшыртыу өсөн нимәләр эшләргә теләгең юҡ, ҡойма эргәһендә алкаштарҙы, юлдарғы сүп-сарҙы, юл ситтәрендәге ҡороған үләнде күрмәйһең, йәштәрҙең нимә менән мәшғүл, кешеләрҙең көндәҙ, кисен нимә эшләүен белмәйһең, уларҙың өҫтәләндә нимә барлығы, имен булмаған ғаиләлә балалар ашанымы, мохтаж булыусылар льготалы дарыуҙар менән тәьмин ителгәнме, ветерандар социаль хеҙмәткәрҙәр менән ҡәнәғәтме, үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәрендә ҡатнашыусыларҙың костюмдары ниндәй хәлдә, мәктәп саңғысылары ярыштарҙа ҡатнашырға әҙерме икәнен һәм башҡа һорауҙарҙы үҙеңә бирмәйһең икән, ауыл районы хакимиәте башлығы булырға рухи хоҡуғың юҡ. Ауыл ерендә хакимиәт башлығы атай урынына булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Блогка яҙыусылар ауылдарҙың төп бәләһе - эшһеҙлек мәсьәләһен ҡыйыуһыҙ ғына ҡуҙғата. Ауылдарҙың юҡҡа сығыуы тап ошоға бәйләнгән дә инде. Шуға ла беҙ 1-се биттәге "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында ошо эшһеҙлек мәсьәләһен тикшереүгә сығарҙыҡ. Иғтибар итегеҙ һәм фекерҙәрегеҙ булһа, яҙып ебәрегеҙ.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Президенты Указы менән Әлфис Ғаязов БР мәғариф министры итеп тәғәйенләнде. Әлфис Суфиян улы 1956 йылда Асҡын районының Иҫке Ҡазансы ауылында тыуған. Ул 2000 йылдан алып әлеге көнгә тиклем М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Педагогика институты директоры булып эшләне.

✔Автомобиль юлдарын һаҡлау маҡсатында дөйөм ҡулланылыштағы юлдарҙа яҙғы юл өҙөклөгө осоронда йыл һайын ауыр йөклө транспорт хәрәкәтенә сикләүҙәр индерелә. Быйыл улар 5 апрелдән 5 майға тиклем ғәмәлдә буласаҡ. БР Хөкүмәте бойороғона ярашлы тормошҡа ашырылған сикләү аҙыҡ-түлек, почта, орлоҡ һәм ашлама ташыусы транспорт хәрәкәтенә ҡағылмаясаҡ. Бойороҡтоң ҡушымтаһында транспорт кәсәренә төшкән рөхсәт ителгән ауырлыҡ күрһәткестәре бирелә.

✔Ошо көндәрҙә Башҡортостандың тәүге ижтимағи электрон гәзите асылды. Тап ошондай йүнәлешле Интернет баҫманы ойоштороу зарурлығы хаҡында БР Президенты Рөстәм Хәмитов блогерҙар менән осрашыуҙа ла әйткәйне. Хәҙер теләге булған һәр кем республика яңылыҡтары менән http://i-gazeta.com/ электрон адресы буйынса ла таныша ала. Электрон баҫманы ойоштороусыларҙың төп талабы - мәғлүмәт аныҡ фактарға нигеҙләнгән һәм авторҙың ысын исем-шәрифе күрһәтелгән булырға тейеш.

✔Быйыл яҙ Башҡортостан биләмәһендә әллә ни ҙур ташҡындар булмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта һыу һаҡлағыстарҙы тәьмин итеүгә етерлек һыу запасы ла буласаҡ. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Юрий Пустовгаров рәйеслегендә үткән ташҡындарға ҡаршы комиссия ултырышында ошо хаҡта һөйләнде. Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Дим йылғаларында һыу кимәле бер метрҙан да артығыраҡҡа күтәрелмәйәсәк, тип фаразлана. Ташҡындар апрель аҙағына май башында көтөлә. Гидрометеорологтар әйтеүенсә, мартта һауа торошо үҙгәреп торасаҡ, көндөҙ өс-һигеҙ градус йылы булһа, төндә биш-ун градусҡа тиклем һыуытасаҡ.

✔БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы дәүләт һәм муниципаль милектәге ер участкалары менән эш итеү, улар менән идара итеүгә бәйле эшмәкәрлек алып барыусы белгестәрҙе уҡытыу буйынса кҫмә зона семинарҙары ойоштора.

*✓ "Математик атлет", ҡыҫҡаса "Матлет", тип аталған был сара лицейҙың бәләкәй генә уҡытыусылар коллективы тарафынан әҙерләнеп үткәрелгән ҙур сара. Олимпиада һәр йылдың март-апрель айҙарында уҙғарыла.*



ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ҒАИЛӘ ТӘРБИӘҺЕНӘ...
## ни етә?

**Баш ҡаланың опека һәм попечителлек идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2010 йылда Өфөлә 500 бала ғаиләле булған. Ведомство етәксеһе Милана Скоробогатова әйтеүенсә, тәрбиәгә бала алырға теләүселәрҙең барыһы ла мотлаҡ рәүештә "Ғаилә" үҙәгендә ата-әсәне алыштырыусылар мәктәбендә уҡытыла. Былтыр был үҙәктә 420 кеше белем алған.**

Ғаиләгә тәрбиәгә бала алыуҙың өҫтөнлөклө төрө - уллыҡҡа алыу. Милана Скоробогатова белдереүенсә, былтыр 108 бала уллыҡҡа һәм ҡыҙ итеп бирелгән, уларҙың берәүһен Америка Ҡушма Штаттары граждандары уллыҡҡа алған. Йыл һайын сит баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алыусылар һаны 13-15 процентҡа күбәйә, 2008 йылда 71 бала ата-әсәле булһа, 2009 йылда уларҙың һаны - 91-гә, ә 2010 йылда 108-гә еткән.

Бынан тыш, идаралыҡ балаларҙы үҙҙәренең элекке ғаиләләренә кире ҡайтарыу буйынса ла маҡсатлы эш алып бара. Төрлө органдар хеҙмәте менән былтыр 87 бала үҙенең ғаиләһенә ҡайтарылған, был һан 2009 йыл менән сағыштырғанда 12 процентҡа юғарыраҡ.

Баланы ғаиләгә урынлаштырыуҙың тағы ла бер төрө - опека. 2010 йылда 252 бала опекаға бирелгән. Шул уҡ ваҡытта 12 бала кире интернат учреждениеларына ҡайтарылған. Милана Скоробогатова әйтеүенсә, уларҙың 4-әүһе опекундың үҙ бурыстарын тейешле кимәлдә үтәмәгәне өсөн, 8-е опекундың бала менән уртаҡ тел таба алмауы һөҙөмтәһендә ҡайтарылған. 2010 йылда патронат тәрбиәгә 10 бала бирелгән. Был ғаиләләрҙең барыһына ла "Ғаилә" үҙәге белгестәре ярҙам итеп тора. Психологтар, юристар, социаль педагогтар ата-әсәләргә кәңәш бирә, балалар өсөн тренингтар үткәрелә. Опека һәм попечителлек органдары ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған бала 23 йәшкә еткәнсе уның хоҡуҡтарын һаҡлау эшмәкәрлеге менән дә булыша. Әлеге ваҡытта ҡаланың балалар йорттары базаһында интернатты тамамлаусылар өсөн махсус хеҙмәттәр булдырылған. Белгестәр уларҙы үҙ аллы тормошҡа әҙерләй, социаль-хоҡуҡи ярҙам күрһәтә.

# БАЛАЛАР БАҠСАЛАРЫН...
## арттырмаҡсылар

**Өфөлә 2011 йылдың аҙағына тиклем ете балалар баҡсаһы төҙөләсәк.**

Баш ҡалала балалар баҡсаһына сират көтөүселәр һаны кәмемәй - әлеге ваҡытта унда яҡынса 17 мең сабый иҫәпләнә. Был проблеманы хәл итеүҙең ике генә юлы бар: яңы балалар баҡсалары төҙөү һәм үҙ тәғәйенләнеше буйынса ҡулланылмаған элекке биналарҙы ҡаланың мәктәпкәсә белем биреү системаһына ҡайтарыу.

Баш ҡалала йыл аҙағына тиклем ете балалар баҡсаһы төҙөләсәк, Орджоникидзе, Октябрь, Совет райондарында тағы ла биш бина кире ҡайтарыласаҡ. Балалар баҡсаларына йөрөүҙең яңы төрҙәрен булдырыу ҙа был siratты өлөшләтә булһа ла кәметергә мөмкинлек бирә. Ҡаланың мәғариф идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 500-ҙән ашыу бала ҡыҫҡа көн төркөмдәрендә, 101 бала ғаиләләрҙә ойошторолған төркөмдәрҙә тәрбиәләнә.

Бынан тыш, социаль яҡлау органдарында иҫәптә тороусы күп балалы һәм тулы булмаған, насар тәьмин ителгән ғаиләләргә 3 мең һуң күләмендә компенсация түләнә. Әлегә бындай ғаиләләр һаны - 1024. Өфөлә шулай уҡ дәүләт ҡарамағында булмаған алты балалар баҡсаһы эшләй.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТАПҠЫРҘАР ҺӘМ ОТҠОРҘАР...
## башҡортса бәйге тота



**Баш ҡала мәктәптәре уҡыусылары араһында 10 марттан "Шаяниум-2011" тапҡырҙар һәм отҡорҙар асыҡ ҡала конкурсы старт алды. 10 мартта - Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатында, 11 мартта - 84-се татар гимназияһында, 12 мартта - 140-сы башҡорт гимназияһында, 14 мартта Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында һайлап алыу турҙары үтәсәк.**



Быйыл "Шаяниум" конкурсы "Берҙәмлектә - көс!" девизы аҫтында үтәсәк. Конкурстың положениеһына ярашлы, һәр белем усағы 12-15 кешенән торған бер команда тәҡдим итә. Команда төҙөүҙә сикләүҙәр юҡ, тик уларҙың сығышы мотлаҡ башҡорт телендә булырға тейеш. Әле ойоштороу комитетына 22 команда ғариза биргән, уларҙың етәүһе - уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙән.

Бар конкурстарҙа ла теманы асыу, үҙенсәлекле сығыш яһау, импровизация, башҡарыу оҫталығы кимәле, текстарҙың художестволы һәм музыкаль биҙәлеше баһаланасаҡ. Ҡатнашыусылар араһында "Тамашасы һөйөүе", "Иң яҡшы ир-егет роле", "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", "Иң яҡшы шаярыу" номинациялары буйынса еңеүселәр билдәләнәсәк.

ТАҒЫ БЕР БӘЙГЕ

# МАТЕМАТИКАҒА БАШ ЭШЛӘЙМЕ?
## Олимпиадала ҡатнаш!

**Олимпиада үткәреү әллә күпме рәсми ҡағыҙҙар тултырыуға бәйле, күп кеше йәлеп ителгән, ваҡыт һәм аҡса сарыф итеүҙе талап иткән, ойоштороусылар алдында юғары талаптар ҡуйған ҡатмарлы һәм ауыр эш.**

Республика башҡорт лицей-интернатында быйыл 12-се тапҡыр 6-сы синыфтар өсөн математика буйынса берҙән-бер республика олимпиадаһы үтәсәк. "Математик атлет", ҡыҫҡаса "Матлет", тип аталған был сара лицейҙың бәләкәй генә уҡытыусылар коллективы тарафынан әҙерләнеп үткәрелә. Олимпиада һәр йылдың март-апрель айҙарында уҙғарыла. Тәүге тур - ситтән тороп уҙғарылған тур. Ҡатнашыусыларға бирелгән мәсьәләләрҙе сисеү өсөн бер-ике аҙна ваҡыт бирелә. Әҙер яуаптарҙы Өфө ҡалаһы, Кольцевая урамы, 74-се һанлы йортҡа ебәреү мотлаҡ. Быйыл ситтән тороп үткәрелгән тур эштәре 31 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Ебәрелгән яуаптар тикшерелеп, иң яҡшы тип табылған эш авторҙары 17 апрель лицейҙа үтәсәк икенсе турға саҡырыла. Икенсе тур һөҙөмтәләре буйынса 5 еңеүсе билдәләнеп, улар аҡсалата приз менән бүләкләнә. Ҡыҙҙар һәм малайҙарҙы был еңеүгә әҙерләгән математика уҡытыусылары ла бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ.

"Матлет"та ҡатнашыусыларға бер нисә ҡағыҙәне үтәү мотлаҡ. Мәсьәләләрҙең сиселеше урыҫ телендә ябай мәктәп дәфтәрендә тапшырылырға тейеш. Дәфтәр тышында баҫма хәрефтәр менән уҡыусының фамилияһы яҙыла. Дәфтәрҙең беренсе битендә шулай уҡ баҫма хәрефтәр менән олимпиадала ҡатнашыусының тулыһынса фамилия, исем һәм атаһының исеме, мәктәп номеры йәки мәктәптең юридик адресы, мәктәптең индексы менән тулы почта адресы, мәктәп урынлашҡан ҡала йәки ауылдың коды менән телефоны, уҡыусының тулы өй адресы, өй һәм кәрәҙле телефон номеры, математика уҡытыусыһының тулы исем-фамилияһы һәм шулай уҡ мәктәп директорының тулы исем-шәрифе, директорҙың ҡултамғаһы һәм белем учреждениеһының мисәте булырға тейеш.

Олимпиаданың II тур һөҙөмтәләре Республика башҡорт лицей-интернатына уҡырға ингәндә уҡыусылар өсөн бонус балдар булып иҫәпләнә. Олимпиада уҡыусылар араһында математиканы популярлаштырыу буйынса республика олимпиадалары хәрәкәтендә үҙенең лайыҡлы урынын алған сара булып тора.

Белешмәләр өсөн телефондар: (347) 243-14-75, 242-18-32; Мәсьәләләрҙе лицейҙың рәсми сайтынан алырға була: www.rbli.ru

**Тимур НӘҘЕРШИН.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округында мәҙәниәт өлкәһендә лә сит илдәр менән хеҙмәттәшлек булдырылған. Мәҫәлән, былтыр Өфө делегацияһы Төркиәнең Мәрмәрис ҡалаһында үткән "Яҙ һәм диңгеҙ" тигән халыҡ-ара фестивалдә ҡатнашҡан. Йәйен баш ҡаланың 6-8 класс уҡыусылары Германияның Галле ҡалаһында уҙғарылған "Балалар ҡалаһы" халыҡ-ара проектында ҡатнашҡан.

✓БР буйынса Пенсия фонды идаралығының 69 бүлексәһендә инфоматтар ҡуйылған. Был электрон терминалдар Пенсия фонды ҡарамағындағы дәүләт хеҙмәттәре менән файҙаланырға ярҙам итә. "Башҡортостандың социаль картаһы" универсаль электрон карта ярҙамында һәр граждан Пенсия фондындағы үҙе тураһындағы мәғлүмәтте белә ала. Шулай уҡ бында белешмә һәм мәғлүмәт хеҙмәттәре тормошҡа ашырыла.

✓М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары 14-21 мартта Ҡаҙанда гастролдәрҙә буласаҡ. Театр Ҡаҙанға туғыҙ спектакль алып бара. Улар араһында "Әхмәтзәки Вәлиди Туған", "Шәүрәкәй", "Хәйерле иртә, Энид", "Хыялый", "Балаҡайҙарым", "Яратыу гонаһмы?", "Минең ғаиләм" кеүек премьера спектаклдәре бар. Спектаклдәр Ғ. Камал исемендәге Татар дәүләт академия драма театрында үтәсәк.

✓28-29 мартта 91-се Өфө ҡала гимназияһы базаһында инглиз теле уҡытыусыларының Рәсәй-Америка фәнни-ғәмәли семинары үтәсәк. Уны Америка- Башҡортостан интерколледжы, Кембридж университеты нәшриәте һәм БР Мәғариф министрлығы ойоштора. Телефондар: 276- 31-28; 272 -03-95.

✓БР Мәғарифты үҫтереү институтында "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2011", "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2011", "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2011" республика конкурстарында ҡатнашыусылар өсөн семинар булып үтте. Семинарҙа төрлө тренингтар, оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Уҡытыусылар конкурсы апрелдең беренсе яртыһында Өфөлә буласаҡ.

✓Федераль суд приставтары хеҙмәтенең БР буйынса идаралығында "ышаныс телефоны" эшләй. Бөтә белдереүҙәр махсус журналда теркәлә. "Ышаныс телефоны" белешмәләр бирмәй, ул коррупцион ғәмәлдәрҙе асыҡлау инструменттарының береһе булып тора. Телефон: (347) 273-59-82.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Балалары мәктәптә уҡыған ата-әсәләр, уҡытыусылар араһында яңы мәғариф стандарттары проектына бәйле ҙур ғауға булып алды. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа министр Андрей Фурсенко йөҙөндә Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығы йәмғәтселеккә тынысланырға һис ирек бирмәй. Ул ошо йылдар буйына Рәсәй мәғариф системаһын Көнбайыш өлгөһөндә үҙгәртеп ҡороуға булған бар фантазияһын эшкә егә.**

# БЕҘГӘ АҢРА...

## әммә сәләмәт балалар кәрәкме?



Бына шулай алыш-тартыш менән булһа ла ҡайһы бер реформалар, оҡшаймы ул халыҡҡа, юҡмы, тейешле һөҙөмтә бирәме ул, юҡмы - әкренләп ғәмәлгә ашырыла килә. Мәҫәлән, "илле алла, алтмыш мулла" менән тигәндәй, бер кемдең фекерен дә һанға һуғып тормаҫтан индерелгән БДИ (Берҙәм дәүләт имтихандары) әле булһа камиллаштырылып бөтөрөлә алмай ята. Ә вуздарҙа уҡып йөрөүсе студенттарҙың башын ҡаңғыртыусы белем биреү кимәле тураһындағы закондың ни мәғәнәһе бар икән? Беҙҙең ил мөхитенә йәбешмәгән бакалавр, магистратура кеүек сит ил өлгөһө индереүҙе әлеге лә баяғы "көнбайыш"тарҙан кәм күренмәҫкә маташыу, улар тирмәненә һыу ҡойоу тип кенә аңларға була.

Әле килеп, тағы бер яңылыҡ менән шаҡ ҡатырҙы Фурсенко әфәнде. Яңы мәғариф стандарттары проектын фәҡәт битарафтар менән ялҡауҙар ғына тәнҡитләмәне! Физкультура ғына уҡытып, балаларҙы күрәләтә наҙан ҡалдырыу буламы ни был, тиғән шөбһәгә бирелде йәмәғәтселек. Етмәһә, бөтә тишеккә лә танауын тығырға яратҡан "аҡыл эйәһе" В. Жириновский: "Беҙгә аңра һәм сәләмәт балалар кәрәк, ә аҡыллы һәм ауырыуҙар беҙгә кәрәкмәй", - тип утҡа кәрәсин һибеп ебәрҙе.

Нимәнән ғибәрәт һуң был документ ишараты? Уның буйынса, уҡыусылар X кластан алып дүрт мотлаҡ фән буйынса ғына "белем алаçаҡ", имеш: физкультура, ОБЖ (тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре), "Рәсәй донъяла" һәм уҡыусының үҙенең индивидуаль проекты. Ҡалған фәндәрҙе алты төркөмгә бүлеп, уҡыусыларға уларҙың һәр беренәнән бер-ике предмет һайлап уҡыу хоҡуғы биреләсәк икән. Өйрәнеү кимәле буйынса һәр төркөм үҙе түбәндәге өс төркөмсәгә бүленә: нигеҙ предмет, интеграцияланған предмет һәм профиль предмет. Был нимәне аңлата һуң? Миҫал өсөн физиканы алып ҡарайыҡ. Нигеҙ курс киләсәктә вуздың физика факультетына инергә уйлап та ҡарамаған уҡыусыға мәктәпте тамамлау өсөн кәрәк булған кимәлдә белем бирәсәк. Интеграцияланған версия был фәндең нигеҙҙәренән тыш, уны башҡа фәнни дисциплиналар менән бәйләнеше системаһында өйрәнеүҙе күҙҙә тота. Профиль курс, ниһайәт, репетиторҙарҙың өҫтәмә ярҙамынан тыш та физиканан вузға уҡырға инеү өсөн аҙерлек мөмкинлеге бирәсәк.

Һәр бер яңылыҡ кеүек үк, был проекттың хуплаусылары ла, ризаһыҙлыҡ белдереүселәре лә күп. Тәүҙәрәк бигерәк тә ата-әсәләр араһында проектты бер яҡлыраҡ ҡабул итеүселәр күп булды. "Әгәр бала математика, физика кеүек фәндәрҙе яҡын күрә икән, ул нигеҙҙә шул йүнәлештә белем аласаҡ, ә гуманитар фәндәргә "еңелсәрәк" ҡараһа ла була. Ә инде әҙәбиәт, тел дәрестәренә өҫтөнлөк биреүселәр өсөн математика йә химияның бер кәрәге лә юҡ", - тигәнерәк рәүештә аңлашылғайны проект тәүҙәрәк.

- Балалар йә математиканы, йә рус телен уҡымаясаҡ тип хаталанырға ярамай. Икеһен дә һайлау мөмкинлеге бирелә. Яңы документты ентекләберәк уҡырға кәрәк, - ти БР мәғариф министры урынбаҫары Владимир Аристархов. - "Телә буйынса" категорияһында бирелгән дисциплиналар шулай уҡ мотлаҡ өйрәнелергә тейеш. Проект документтарының ҡатмарлы телдә унышһыҙ формулировкалар менән яҙылышы уны бер яҡлы аңлауға килтереүсе сәбәп булды. Нисек кенә булмаһын, яңы документта файҙалы фекер бар - унда уҡыусыларға профессиональ йүнәлеш биреү темаһы өҫтөнлөк итә. Шуға күрә киләсәктә унын өсөн кәрәге булмаған берәй фәнде ентекле өйрәнеүгә ваҡыт һәм көс сарыф итеү, бәлки, ысынлап та мотлаҡ түгелдер?

М. Аҡмулла исемендәге БДПУның педагогика кафедраһы профессоры Надежда Сытина ла, бәхәсле урындары булыуға ҡарамаҫтан, мәғариф буйынса яңы стандарттың яҡшы яҡтарын ғына телгә ала. Проекттың төп мәғәнәһе белем алыу ғына түгел, ә шәхестең үҫеше, ти ул. 9-сы класты тамамлаусы балалар киләсәктә үҙҙәрен ниндәй һөнәргә бағышларға теләүен күҙ алдына килтерергә тейеш. Шуға күрә лә уларға фәндәрҙе һайлап уҡыу мөмкинлеге биреү дөрөҫ, тигән фекерҙә ул.

Өлкән кластар өсөн мәғариф стандарттары 2020 йылда ғәмәлгә индерелергә тейеш. Әйтеп китеүебеҙсә, ниндәй фәндәрҙе тәрәндән (профиль кимәлдә), ә ниндәйҙәрен ҡәҙимге мәктәп программаһы буйынса (нигеҙ кимәлдә) уҡырға теләүҙе уҡыусыларҙың үҙ мәйеленә ҡуйыуы өсөн был проект бик ныҡ тәнҡит утына эләкте. Хатта ки уҡытыусылар араһында ла физкультура, Тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре, "Рәсәй донъяла" тигән фәндәрҙе мотлаҡ предмет тип аңлаусылар күп булды. Ысынбарлыҡта иһә өлкән кластарға унлап предмет өйрәнергә тәҡдим ителә, шул иҫәптән рус телен дә.

Әлеге мәлдә ҡатмарлы телдә, фәнни стилистика нигеҙендә яҙылған был проект ҡайтанан эшләнеп, әҙәм аңларлыҡ хәлгә килтерелде, ләкин уның ҡасан ғәмәлгә индерелеүе әлегә билдәһеҙ ҡала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ӨҪТӨНЛӨКЛӨ ХОҠУҠ БОҘОЛҺА...

**Ағайым менән мираҫ хоҡуғына индек һәм бер бүлмәле фатирҙың икенән берәр өлөшөн алдыҡ. Фатирҙың баҙар хаҡы 1200 мең һум. Туғаныма 400 мең тәҡдим итеп ҡарайым - ул ризалашмай. Был осраҡта миңә ни эшләргә? Минең ризалыҡтан тыш ул үҙ өлөшөн һата аламы?**

- Үҙ өлөшөн һатамы, юҡмы - был ағайығыҙҙың хоҡуғы. Өҫтөнлөклө һатып алыу ҡағиҙәһен дөрөҫ ҡулланып, ул һеҙҙең ризалыҡтан тыш үҙ өлөшөн һата ала. РФ Граждандыҡ кодексының 250-се статьяһына ярашлы дөйөм милек хоҡуғындағы өлөштө сит кешегә һатҡанда өлөш милекселәренең ҡалғандары һатыла торған өлөштө тәғәйенләнгән хаҡҡа һатып алыуҙа өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә була.

Өлөшөн һатыусы өлөш милекселәренең ҡалған ҡатнашсыларына үҙ өлөшөн һатыуы, унын хаҡы һәм уны һатыуҙың башҡа шарттарын күрһәтеп, яҙма рәүештә хәбәр итергә тейеш. Әгәр өлөш милекселәренең башҡа ҡатнашсылары был өлөштө бер ай эсендә һатып алмаһа, һатыусы уны теләгән берәүгә һатып ебәрә ала. Ә инде һатҡан саҡта һатып алыуға өҫтөнлөклө хоҡуҡ боҙолған осраҡта өлөш милке ҡатнашсылары өс ай эсендә суд тәртибендә һатып алыусы хоҡуғы һәм бурыстарын үҙенә күсертә ала.

## ӨЛӨШӨНДӨ ҺАТЫРҒА БУЛА

**Ирем менән 2000 йылда айырылыштыҡ. Өс бүлмәле фатир үҙем, ҡыҙым, элекке ирем исеменә тигеҙ өлөштәрҙә хосусилаштырылды. 2007 йылға тиклем бергә йәшәнек. Аҙаҡ ул сығып китте, был фатирҙа хәҙер дүрт йыл йәшәмәй, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләмәй. Аҙаҡ ул суд аша бүлмә менән файҙаланыу хоҡуғы алды, ләкин унда яңы ҡатыны менән йәшәргә уйлай, бала көтәләр. Фатирҙы һатырға уйлағайным, ләкин элекке ирем уның өсөнсө өлөшө хаҡынан күпкә артыҡ хаҡ һорай. Бүлмәне арендаға бирәм, тип янай. Миңә ни эшләргә?**

Фатирҙы тотошлай элекке ирегеҙҙең ризалығы менән генә һата алаһығыҙ. Һеҙҙең осраҡта бер генә юл бар: үҙегеҙҙең һәм ҡыҙығыҙҙың өлөштәрен, тәүҙә элекке ирегеҙгә тәҡдим итеп, һатырға. Тотош фатирҙы һатыуға ҡарағанда был күпкә арзан килеп сыға, ләкин башҡаса юл юҡ.

## ҺӘР КЕМГӘ - ИКЕНӘН БЕР

**Фатир хосусилаштырылған, үҙемдең икенән бер өлөшөмдө айырып алырға итәм, ләкин икенсе милексе риза түгел, сөнки үҙ өлөшөмдә мин ҡыҙыма бүләк итергә уйлайым. Ул саҡта фатир коммуналь торлаҡҡа әйләнәме? Ул өс бүлмәле. Уны нисек бүлергә?**

Уртаҡ милектәге өлөштө ике милексенең дә ғаризаһы йә иһә, уларҙың береһе риза булмаған хәлдә суд тәртибендә айырып алырға була. Уртаҡ милектәге өлөштө айырып билдәләү фатирҙы коммуналь торлаҡ итеү тигәнде аңлатмай. Әгәр милекселәрҙең килешеүендә башҡа төрлө әйтелмәгән булһа, уларҙың өлөштәре тигеҙ (икенән берәр) бүленә. Бүлмәләрҙе нисек бүлеү, файҙаланыу мәсьәләләре үҙ-ара һөйләшеп-килешеп, уны файҙаланыу тәртибе тураһында килешеү төҙөп йәки суд аша хәл ителә.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



## Аппетитты асыу

Бының өсөн 8 өлөш әрем, 2 өлөш меңъяпраҡ үләне алығыҙ һәм бер банкаға һалып болғатығыҙ. 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойғас, төнәтегеҙ һәм һөҙөгөҙ. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап ашар алдынан ярты сәғәт алда эсергә.

## Витаминлы төнәтмәләр

Миҙгелдең был осоронда витаминлы төнәтмәләр эсеп алыу файҙалы. Берәр балғалаҡ гөлйемеш һәм ҡарағатты 2 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Был тәмле дауаны 7-10-14 көн тирәһе дауам итегеҙ. Шулай уҡ гөлйемеш һәм мышарҙы ла шул уҡ рәүешле әҙерләп эсергә була.

## Аш һеңдереү ағзаларына ярҙам

Аш һеңдереү ағзалары, бигерәк тә ашҡаҙан аҫты биҙе ялҡынһынғанда (панкреатит булғанда) эстә газ күбәйә, был ваҡытта түбәндәге төнәтмә ярҙам итер: 2-шәр өлөш бөтнөк үләне һәм валериана тамыры, 1 өлөш анис орлоғо алығыҙ һәм болғатығыҙ. 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп, көнөнә ике тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Дауаны 5-10 көн дауам итергә.

## Тын юлдарын таҙартыу

Тын юлдары ауырыуҙары булғанда ҡаҡырыҡ ҡыуырға түбәндәге төнәтмә ярҙам итер: дүртәр өлөш алтей тамыры менән үгәй инә үләне, ике өлөш мәтрүшкә алып болғатҡас, бер ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнәтергә. Ете көн буйына көнөнә 2-3 тапҡыр 2-3 ҡалаҡлап эсергә.

Тағы бер ысул: ете өлөш үгәй инә үләне, өсәр өлөш юл япрағы үләне менән татлы тамыр. Шулай уҡ бергә болғатып, бер ҡалаҡ үләнгә бер стакан иҫәбенән һыу ҡойоп, төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр берәр ҡалаҡлап эсегә. Дауаны ете көн дауам итеү мотлаҡ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

***✓ Беҙҙең стратегик ҡарар - алған уңышты, тапҡан табышты көн талаптарына, типтереп тәләфләмәү, ә ныҡлы база булдырыуға, техника туплауға йүнәлтеү - дөрөҫ булды, үҙен аҡланы.***



МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

**Яңы быуат һәм яңы меңъйыллыҡ алдында торған иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе - Ер яҙмышы. Шағирҙар бишек итеп күргән, изге әсә итеп данлаған ғәзиз төйәгебеҙ күптән инде яҡлауға һәм ҡурсалауға мохтаж. Үҙен Ерҙең хужаһы, уның буйһондороусыһы итеп тотҡан кеше самаларҙан сығып шашты, ергә төҙәлмәҫлек яралар һалды, Ерҙең, тимәк, кешелектең киләсәген хәстәрләмәне. Әммә Ерҙең түҙемлеге һәм йомартлығы сикһеҙ түгел, уның үҙ хәтере, тик уға хас йәшәү ҡануңдары бар. Ошоларҙың дәлиле - һуңғы йылдарҙа үтә лә ишәйгән ер тетрәүҙәре, һыу баҫыуҙары, айҙарға һуҙылған ҡоролоҡтар. Һөҙөмтәлә, меңәрләгән кеше һәләк була, аслыҡтан интегә.**
**Беҙҙең атайсалыбыҙ Башҡортостан Рәсәйҙә иң тотороҡло, тырыш, тыныс хеҙмәте менән билдәле төбәктәрҙән һанала. Башҡорт халҡының 40 проценты ауылда йәшәй, тимәк, беҙҙең милләт өсөн Ер яҙмышы, уның бөгөнгөһө һәм киләсәге айырыуса мөһим. Быға милли генофонд та ауылда һаҡланды һәм үҫтерелде. Ошондай шарттарҙа ерҙе яратҡан, уны хәстәрләгән һәм мул уңыш алып, ауылдаштарын эш һәм ризыҡ менән тәьмин иткән шәхестәрҙең, хужалыҡтарҙың тәжрибәһе ифрат мөһим. Был тәжрибәне өйрәнергә һәм таратырға кәрәк.**
**Бәрәкәтле Мәләүез районы ерендә тамъян ырыуы башҡорттары йәшәгән Ҡотош ауылы ҡасандыр бик билдәле ине. Был ауылдың данын "Мәжит Ғафури" исемен йөрөткән, мал үрсетеү менән шөғөлләнгән колхоз күтәрҙе. Заманында Ҡотош ауылына генсек М.С. Горбачев та килеп китте. Горбачев башлаған "үҙгәртеп ҡороуҙың" ҡоро еле был хужалыҡты ла аяманы һәм быуат аҙағына тиклем ул йонсоған колхоз аты һымаҡ, күтәртеп, йән бирҙе. Әммә бөгөн Ҡотош ауылының даны тағы ла юғары. Был лайыҡлы абруйҙы "Старт" исемен йөрөткән крәҫтиән-фермер хужалығы яуланы. Был хужалыҡты бына 20 йылға яҡын инде юғары белемле агроном, Ҡотош ауылы егете Илдус Маркс улы Шәрипов етәкләй. Уның профессиональ кимәлен 2010 йылдың октябрендә Мәскәүҙә үткән халыҡ-ара агрономдар олимпиадаһы иҫбатлай. Был бәйгелә, Украина вәкиленән ҡала, Илдус Шәрипов икенсе урынды яулай һәм Ғәрәп Эмираттарына ғаилә путевкаһы менән бүләкләнә. "Старт" хужалығының үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында булған һөйләшеүҙе хөрмәтле "Киске Өфө" уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

# ЕРҘЕҢ ДӘ ХӘТЕРЕ БАР,

## уның да түҙемлеге сикһеҙ түгел...

**➔ Былтырғы ауыр, ҡоролоҡло йыл һөҙөмтәләре һеҙҙең хужалыҡты ла урап үтмәгәндер...**

-Йыл ауыр булһа ла, беҙҙең тырышлыҡты ер-әсә барыбер баһаланы, тип уйлайым. Сөнки беҙ хеҙмәтебеҙ емешенән ул ҡәҙәре лә мәхрүм ҡалманыҡ. Беҙҙең хужалыҡ бөтәһе 1900 гектар ерҙе эшкәртә. 2010 йылда иген культуралары гектарынан уртаса 16 центнер уңыш бирҙе. Ошо иҫәптән ужым арышы - 30 центнер, ужым бойҙайы - 28, арпа - 8, ярауай бойҙай - 10, ҡарабойҙай - 4, көнбағыш - 10 центнер. 300 гектар майҙандан 5300 тонна шәкәр сөгөлдөрө йыйып алдыҡ. Шәкәр сөгөлдөрөнән башҡа бөтә эштәрҙе лә үҙ көсөбөҙ менән атҡарабыҙ. Быйылдан алып был эште лә үҙебеҙ эшләйәсәкбеҙ. Ошо маҡсаттан сығып, Голландияла етештерелгән "Агрифак-Кватро" заманса сөгөлдөр комбайны һатып алдыҡ.

**➔ Бөгөн бик күптәр буш ятҡан ерҙәрҙе күреп әсенһә лә, үҙе эшкә тотона һалып бармай. Мәҫәлән, һеҙҙеке кеүек крәҫтиән-фермер хужалығы төҙөү өсөн аҡса ғына түгел, тәжрибә, белем, ныҡышмалылыҡ етмәү ҙә ҡамасаулай бит инде ул. Үҙегеҙҙең хужалыҡтың ойошоу тарихына туҡталығыҙ әле.**

-Беҙ 1992 йылда 11 кеше колхоздан сыҡтыҡ. Ул ваҡытта беҙҙең 44 гектар ғына еребеҙ бар ине. Колхоз-совхоздарҙың киләсәктәге аяныслы яҙмышы ул саҡтарҙа уҡ төҫмөрләнә ине. Йылына 143 процент менән 1,5 миллион һум кредит алдыҡ, трактор, һабан, сәскестәр хәстәрләнек. Тәүге йылда уҡ кредитты ҡапланыҡ. Киләһе йылдарҙа ерҙе арттырыу маҡсатында дәүләт резервындағы ерҙәрҙе лә арендаға ала башланыҡ. Ерҙе, әлбиттә, төрлө урындарҙан бирҙеләр, хатта 25 километр алыҫлыҡҡа йөрөп эшкәртә торғайныҡ. Колхоздан сыҡҡанда милек пайын киләһе 10 йылда бирәбеҙ тип алданылар. Килде-китте түрәләр самаларҙан сығып урлашты, халыҡ әсе тирен түгеп йыйған мөлкәтте туҙҙырҙы, ә беҙ ҡырмыҫҡа һымаҡ эшләй бирҙек.

Бөгөн эшкәрткән 1900 гектар ерҙең 700-өн дәүләт резервы ерҙәре тәшкил итә. Был ерҙәр хужалыҡҡа яҡын урынлашыуы менән уңайлы. Ҡалған 1200 гектар ерҙе Мәжит Ғафури колхозының элекке ағзалары пай иҫәбенә дөйөм милеккә алғайны. Бөтәһе 240-лап кеше үҙ ерҙәрен беҙгә арендаға бирҙе. Аренда өсөн түләүҙе боҙғаныбыҙ, үтәмәгәнебеҙ юҡ. Пай күләме 5 гектар тирәһе. 1 гектар өсөн 50 кг шәкәр, 5 центнер иген һәм 10 центнер һалам бирәбеҙ. Бынан тыш, бөтә тирә-яҡ



Айнур НАРБӘКОВ фотоһы.

беҙҙән он, шәкәр, мал аҙығы, һалам һатып ала.

Беҙҙең хужалыҡта ергә мөнәсәбәт ысын хужаларса - ерҙе сәсеү әйләнеше ҡағиҙәләрен боҙмай эшкәртәбеҙ, парға һөрөүҙе ҡулланабыҙ. Йыл һайын 1 гектар майҙанға уртаса 90-105 кг минераль ашлама индерәбеҙ. Хужалыҡта эшләгән 8 механизатор ҙа ауыл ирҙәре, ошо ерҙә тыуған егеттәр, ерҙе яраталар, уның ҡәҙерен һәм әһәмиәтен беләләр. Һуңғы йылдарҙа колхоздарҙы, ерҙе бик ҡыйырһыттылар, унан табыш алырға ғына теләп, уңға ла, һулға ла тараттылар, эшкәртмәнеләр һәм хәстәрләмәнеләр. Ерҙең 1 см гомус ҡатламы ғына ла миллион йылда туплана, уны Аллаһы Тәғәлә, тәбиғәт тыуҙырған. Шуға күрә, хосуси милек булып ер үҙе түгел, ә кешенең ерҙә эшләп алған табышы ғына торорға тейеш. Бар милләттәр, айырыуса беҙ, башҡорттар, ер өсөн быуаттар буйы ҡан ҡойған халыҡ, уны һатыу - атайынды, әсәйеңде һатыуға тиң тип уйлайбыҙ. Был осраҡта Рәсәй Федерацияһының Ер кодексы ҡәтғи тәнҡиткә лайыҡ. Унда ерҙе эшкәрткән, уны хәстәрләгәндәр өсөн ярҙам, дәртләндереү саралары юҡ. Илде, ерҙе яратмаған, халыҡты алдаған һәм талаған олигархтарға, алдап-йолдап эш иткән сит ил граждандарына ерҙе хосуси милеккә алыу юлдары күп. Минең инаныуымса, хосуси милек булып тик шәхси йорттар эргәһендәге, төрлө ҡорамалдар урынлашҡан ерҙәр генә законлаштырылырға тейеш.

16 февралдә БСТ-ла тәбиғәткә арналған бик ҡыҙыҡлы, фәһемле тапшырыу булды. Һүҙ боҙлоҡтарҙың бөгөнгө торошо һәм тиҙләп иреүе хаҡында барҙы. Баҡтиһәң, Гренландия боҙлоғо Ер шары боҙлоҡтарының 10 процентын тәшкил итә һәм үтә тиҙ иреүе менән ғалимдарҙы хафаға һала. Әгәр ошо боҙлоҡ тулыһынса иреп бөтһә, донъя океаны 7 метрға күтәреләсәк һәм Американың ҡайһы бер штаттары, Европаның күп өлөшө, Лондондың яртыһы тиерлек һыу аҫтында ҡаласаҡ. Ошондай фажиғәле шарттарҙа Башҡортостандың иҫ киткес тәбиғәте, уңдырышлы ерҙәре, әлбиттә, иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ, уны ҡулға эләктерергә тырышыусылар бихисап буласаҡ. Ергә ҡытлыҡ кисергән сит илдәр бөгөндән Рәсәйҙең буш ятҡан ерҙәренә һеләгәйен ағыҙып ҡарай. Америкала күптән түгел "Терра нулис" (Нулевая земля) тигән китап сыҡты. Уның авторҙары, көнбайыш Себерҙә урынлашҡан ерҙәрҙе кеше эшкәртмәй тиерлек, ә ул ерҙәр кешелек мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тейеш, тигән һылтау менән был төбәккә ҡул һуҙа, йәмәғәтселек фекерен әҙерләп маташа. Илен, телен, халҡын байлыҡҡа алмаштырған, сереп байыған әфәнделәргә ерҙе һатып алыу, уны яңынан һатыу, арендаға биреп, рента алыу бер ни ҙә тормаясаҡ. Ошо ерҙә быуаттар буйы йәшәгән, уны яҡлап һәм һаҡлап ҡан ҡойған аҫаба халыҡ ҡыҫырыҡланып, кәмһетелеп, еренән ҡыуыласаҡ. Ваучерҙар тәжрибәһе генә ней тора, колхоз, совхоздарҙы тарҡатып, халыҡҡа нимә генә бирҙеләр?!

**➔ Район етәкселегенең, ауыл хужалығы белгестәренең крәҫтиән-фермер хужалыҡтарына мөнәсәбәте нисек, ярҙамы тейҙеме һәм тейәме?**

- Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, айырыуса тәүге йылдарҙа етәкселәр беҙҙең һымаҡ крәҫтиән-фермер хужалыҡтарын башлап ойоштороусыларға ҡаршы булды. Ерҙе арендаға өлөшләп, алыҫтан биреүҙәре генә лә быға миҫал булып тора. Хәҙер ҡараш үҙгәрҙе һәм үҙгәрә килә. Ашламаларға, яғыулыҡҡа аҙ-маҙ булһа ла ташламалар була, ауыл хужалығы идаралығы белгестәре һәр саҡ ярҙамға әҙер. Бөгөн беҙҙең өсөн иң мөһиме - улар беҙгә ҡамасауламай.

**➔ Үҙгәртеп ҡороу таяғының иң ауыр башы, һис шикһеҙ, крәҫтиәнгә, ауыл кешеһенә эләкте. Ауылдарҙа бөгөн эшһеҙлек, тимәк, мохтажлыҡ көслө. Типһә тимер өҙөрҙәй егеттәр оҙон аҡса эҙләп Себер тарафтарына китә. Нишләп буш ятҡан ерҙәрҙе эшкәртмәйһегеҙ, тигән һорауға, башлап ебәреүе ауыр, техника юҡ, кредит алып булмай, тип яуап бирәләр. Техниканы һеҙҙең хужалыҡ нисек туплаңы, базаны нисек булдырҙы һәм кредит ярҙамына йыш мөрәжәғәт итәһегеҙме?**

***Беҙҙең хужалыҡта ергә мөнәсәбәт ысын хужаларса - ерҙе сәсеү әйләнеше ҡағиҙәләрен боҙмай эшкәртәбеҙ, парға һөрөүҙе ҡулланабыҙ. Йыл һайын 1 гектар майҙанға уртаса 90-105 кг минераль ашлама индерәбеҙ. Хужалыҡта эшләгән 8 механизатор ҙа ауыл ирҙәре, ошо ерҙә тыуған егеттәр, ерҙе яраталар, уның ҡәҙерен һәм әһәмиәтен беләләр. Һуңғы йылдарҙа колхоздарҙы, ерҙе бик ҡыйырһыттылар, унан табыш алырға ғына теләп, уңға ла, һулға ла тараттылар, эшкәртмәнеләр һәм хәстәрләмәнеләр. Ерҙең 1 см гомус ҡатламы ғына ла миллион йылда туплана, уны Аллаһы Тәғәлә, тәбиғәт тыуҙырған. Шуға күрә, хосуси милек булып ер үҙе түгел, ә кешенең ерҙә эшләп алған табышы ғына торорға тейеш.***

- Беҙ кредитты бер тапҡыр ғына, эште башлап ебәргәндә алдыҡ та, һуңынан был ярҙамдан баш тарттыҡ. Мәшәҡәте, уңыуға ҡарағанда туңыу ихтималы юғарыраҡ булды элек (бөгөн дә шулай, буғай). Беҙҙең стратегик ҡарар - алған уңышты, тапҡан табышты көн талаптарына, типтереп тәләфләмәү, ә ныҡлы база булдырыуға, техника туплауға йүнәлтеү - дөрөҫ булды, үҙен аҡланы. Ҡотош ауылы эргәһендә генә, ҡойма менән уратып алған базала техниканы туплайбыҙ һәм һаҡлайбыҙ, шунда уҡ Фермер-1 маркалы тирмән, мал аҙығы етештереү ҡоролмаһы, 500 тоннаға иҫәпләнгән иген һаҡлағыс бар. Һанап китһәк, "Старт" хужалығының бөгөн Челенджер МТ765С, К-700, ике Т-150, ике ДТ-75, биш МТЗ тракторҙары, КАМаз, МАЗ, ГАЗ, УАЗ автомобилдәре, "Агрифак-Кватро" шәкәр сөгөлдөрө комбайны, киңәләктереүсе КБМ-14, 4ПС,

Брандт-21м, ИМТ-616.6 ауыл хужалығы машиналары, компьютер һәм навигатор менән йыһазландырылған "Адванс ВОРТЕКС" һиптергесе бар. Һуңғы ике йылда ғына ла 30 миллиондан ашыу аҡсаға техника һатып алдыҡ. Алда әйткәнемсә, кредит алыу, ҡиммәткә төшөүҙән тыш, справка йыйыу, сираттарҙа тороу, имзалар көтөп инәлеү кеүек мәшәҡәттәре менән беҙгә оҡшамай. Беҙ лизинг системаһы менән ҡулланыуҙан тыш, етештереүсе заводтар менән туранан-тура эшләйбеҙ. Улар ташламаларҙан тыш, түләү ваҡытын дә өлөшләтә бүлә.

Ваҡытлы матбуғат сараларында донъя күргән мәғлүмәттәр буйынса, бөгөн ер йөҙөндә уртаса бер миллиард кеше аслыҡтан интегә. Аҙыҡ-түлектең хаҡы көндән-көн арта бара. Былдай шарттарҙа, тыуған ерендә, ғаиләндә ташлап, тере көйөнсә балаларынды етем итеп, себер ҡыҙырып, "оҙон" аҡса эҙләүҙә мин үҙем дә, хужалыҡ ағзалары ла хупламай. Киреһенсә, уйламай-нитмәй ябылған, ауыл хужалығы кадрҙары әҙерләгән училищеларҙы яңынан терғеҙеп, ерҙе яратҡан, унда эшләргә теләгән йәштәргә белем биреп, уларға реаль (ҡағыҙҙа түгел) ярҙам күрһәтергә кәрәк.

➔ **Һеҙҙең хужалыҡтың хаҡлы даны, уның ҡаҙаныштары бөтә Башҡортостанға билдәле. Һеҙҙең менән бергә заман һынауын үткән, һеҙгә һәм үҙҙәренә ышанған хеҙмәттәштәрегеҙ тураһында аҙыраҡ әйтеп үтегеҙ әле.**

-"Старт" крәстиән-фермер хужалығында бөтәһе 14 кеше эшләй. Уларҙың һигеҙе - механизатор. Улар - Мәләүез ерендә тыуған, заманында колхозда эшләгән яҡташтарыбыҙ. Эшкә мөнәсәбәттәре хужаларса, сөнки уларҙың бөгөнгөһө лә, киләсәге лә ышаныслы. Хеҙмәт хаҡын аҡсалата һәм ваҡытында түләйбеҙ - айына уртаса 13000 һум тура килә. Аҡсанан тыш, үҙебеҙ етештергән продукцияны ла бирәбеҙ. Ҡош-ҡорт, мал тоторға бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Сезон осоронда (ете ай) ике тапҡыр бушлай ашатабыҙ. Техника яңы булғас, эшләүе еңел, таҙа, йылы кабиналарҙа кондиционерҙар урынлаштырылған. Хужалыҡ ағзаларына махсус эш кейеме бирелә, йыл һайын бушлай медицина ҡарауы үткәрелә. Беҙгә эшкә урынлашырға теләүселәр күп. Ҡышын кәм тигәндә ике кеше 39-сы һөнәрселек училищеһында, йә Ергән МТС-ында курстарҙа уҡып белем кимәлен күтәрә.

➔ **Үҙегеҙ һәм ғаиләгеҙ тураһында ла бер нисә һүҙ әйтеп китһәгеҙ ине. Киләсәккә пландарығыҙ нисегерәк?**

-Үҙем Ҡотош ауылында тыуып үҫтем, белемем буйынса - агроном. Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамланым. Ҡатыным да беҙҙең хужалыҡта эшләй - ул иҫәп-хисап, бухгалтерия эштәрен алып бара. Бер улыбыҙ бар, БДУ-ның 1-се курс студенты. Улымдың буласаҡ һөнәре ауыл хужалығы менән бәйле түгел. Пландарға килгәндә, ошо башлаған эште уңышлы дауам итергә, тыуған ергә булған бурысты намыҫлы түләргә.

**Тимер НИӘТШИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Киске Өфө"нөң 8-се һанында донъя күргән "Колхоз ожмах тойолор ҙа... тик ул саҡта һуң булыр" тигән үтә әһәмиәтле, үтә ваҡытлы фекер алышыу ҙа был әңгәмәгә этәргес көс булып торҙо. Академик Мәҙһәр Насип улы Иҫәнбаевтың әйткәндәре әсендәрә һәм уйландыра, ерҙең бөгөнгөһөн һәм киләсәген хәстәрләргә өндәй.**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*

# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР



**Легендар комбриг Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһы яугирҙары Граждандар һуғышы осоронда күп кенә батырлыҡтар күрһәтеп, Совет хөкүмәтенең ул саҡтағы иң юғары хәрби наградаһы - Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булғандар. 1920 йылда Польша фронтында һәм С.В.Петлюра армияһын ҡыйратыуҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Башҡорт кавалерия бригадаһынан 80-дән ашыу яугир Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Шулар араһынан бригада командиры Муса Мортазин, эскадрон командиры Шәмсетдин Ғафаров һәм взвод командиры Хәлфетдин Фәттәхетдинов был наградаға ике тапҡыр лайыҡ була.**
**30-сы йылдар аҙағында Муса Мортазин һәм уның күп кенә яуҙаштары ла репрессиялана. Сталин үлгәндән һуң уларҙың исемдәре аҡланыуға ҡарамаҫтан, республиканың партия өлкә комитеты Муса Мортазин тураһында яҙыуҙы тыйып килә, шул иҫәптән уның яуҙаштары тураһында ла артыҡ яҙып бармайҙар. Тик 90-сы йылдарҙан башлап ҡына беҙ ошо ҡаһарман шәхестәр тураһында әҙ-мәҙ белә башланыҡ. Әле лә улар республика кимәлендә киң билдәле тип әйтеп булмай. Ә бит уларҙың исеме халыҡ хәтерендә яҡты иҫтәлеккә лайыҡ. Халыҡ үҙенең батырҙарын оноторға тейеш түгел. Ошоно иҫәпкә алып, Мортазиндың яуҙаштары - РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугирҙар тураһында ҡыҫҡаса биографик мәғлүмәттәр бирмәксебеҙ. Райондар кимәлендә булһа ла был шәхестәрҙең исемдәрен мәңгеләштереүгә бер шарт булыр, тип ышанабыҙ.**



## Шәмсетдин Ғафаров

1896 йылдың 15 авгусында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Ҡолсора ауылында тыуған. Теләс ауылында урыҫ мәктәбен тамамлай. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Кавалерияла хеҙмәт итә. Вахмистр (хәҙергесә өлкән сержант дәрәжәһе) званиеһын ала. 1918 йылда һуғыштан ҡайтҡас, башҡорт армияһына хеҙмәткә алына. Бында ул 1-се Башҡорт кавалерия полкында взвод командиры булып йөрөй.

1919 йылдың февралендә Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. Муса Мортазин етәкселегендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкында ҡыҙылдар (Смоленск полкы) менән бергә фронт тота. Һуғыша белмәһәләр ҙә ябай башҡорт халҡын йәберләргә оҫтарған Смоленск полкы һалдаттарының баш-баштаҡлығынан тәҡәте ҡороған Муса Мортазин егеттәре, шул иҫәптән Ш. Ғафаров та, ҡыҙылдарҙы туҙҙырып, аҡтар яғына кире сығып китә. 1919 йылдың яҙы һәм йәйендә Муса Мортазин аҡтар яғындағы башҡорт һалдаттарын бергә туплап, үҙенең полкын бригада кимәленә үҫтерә. 1919 йылдың авгусында Мортазиндың Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы составында ҡыҙылдар яғына ҡабат сыға. 1919 йылдың көҙөндә Петроград фронтында һуғыша. 1920 йылдың майында Ш. Ғафаров хеҙмәт иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкы Польша фронтындағы Башҡорт кавалерия бригадаһына ҡушыла. Бригаданың 27-се полкында 4-се эскадрон командиры сифатында поляктарға ҡаршы һуғыша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн М. В. Фрунзе ҡулынан исемле ҡылыс ала, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Реввоенсоветтың № 57 фарманында (1921 йылдың 17-се феврале) былай тиелгән: "Утверждается присуждение... Реввоенсоветом 12-й армии ордена Красного знамени: Башкирских кавполков. 27-го... командиру 4-го эскадрона тов. Гафарову Шамендину - за то, что 6 июня 1920 г., отправившись с эскадроном на поддержку 28-го кавполка и поведя наступление на дер. Пиняево он бросился в конную атаку на противника, заставил его отступить и захватил неприятельское орудие французского образца..."

1921 йылдың 31 декабрендә Ш. Ғафаровты икенсе тапҡыр орден менән наградлау тураһында тағы бер фарман сыға: "Утверждается присуждение... Реввоенсоветом Западного фронта ордена Красного знамени нижеименованным лицам за выдающуюся стойкость и доблесть, проявленные ими в период бывших наступательных боев на Варшаву и в последовавших затем арьергардных боях, а именно...по бывшей 12-й армии... командиру эскадрона 27-го Башкирского кавполка тов. Гафарову Шамендину...".

Поляктар менән һуғыш бөткәндән һуң Ш. Ғафаров 27-се полктың хужалыҡ командаһы начальнигы була. 1920 йылдың декабренән 1921 йылдың мартына тиклем Киев хәрби округының 24-се уҡсы дивизияһы 2-се Башҡорт полкында взвод командиры булып хеҙмәт итә. 1921 йылда демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайта. 1921-1923 йылдарҙа Йылайыр кантонының хәрби комиссары ярҙамсыһы булып эшләй, 1923-1924 йылдарҙа Ҡаҙан хәрби-сәйәси мәктәбендә белем ала. 1923-1929 йылдарҙа Түбә ҡасабаһында (Баймаҡ районы) эшләй. 1929 йылдан 1-се Өфө ведомство милицияһының дивизион командиры, 1934 йылдан ведомство милицияһының айырым взводы командиры була. 1937 йылдың 17 октябрендә ҡулға алынып, контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләнеп, 8 декабрҙә атыла. 1956 йылда реабилитацияланә.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**

*БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ*

# ӨФӨ БУЙЛАП...
## башҡорт балалар баҡсаһы эҙләнек

**Өфөлә башҡорт балалар баҡсалары бик аҙ. Эш урынынан балалар баҡсаһына путевка бирһәләр ҙә, унда башҡорт төркөмө булмағас, баш тарттым. Йәшәгән урындан 20 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан 40-сы һанлы балалар баҡсаһына путевка юллап алдым.**

Балабыҙ өсөн тик башҡорт балалар баҡсаһын һайлауыбыҙҙың сәбәбе - ҡыҙыбыҙҙы үҙебеҙҙең милләт кешеһе итеп үҫтереү теләге. Бының өсөн ул мотлаҡ үҙ телендә фекер йөрөтөргә, үҙ телендә аралашырға тейеш. Бала рус телмәрен ишетеп кенә өйрәнә лә тиҙ үҙләштерә. Ә туған телен үҙләштерер өсөн һөйләшеп йөрөү мотлаҡ. Кешенең сит телдәрҙе өйрәнеү һәләте сикһеҙ. Аралашыу һәҙмәтһәндә әллә күпме телде өйрәнергә мөмкин. Тарихи шарттар арҡаһында башҡорт халҡына полиглотлыҡ һәләте бирелгән. Башҡорт һәм рус телен былай ҙа яҡшы белгән кешегә мәктәп программаһындағы сит телде өйрәнеү өсөн көс бик аҙ талап ителәсәк. Сөнки уның башҡорт һәм рус телдәрен синтезлы белеүе арҡаһында сағыштырыу һәм тәржемә итеү һәләте үҫешкән була. Шуға күрә, балабыҙ өсөн башҡорт телле балалар баҡсаһы ишектәрен асыуыбыҙ - уның киләсәген уйлап, киң мөмкинлектәр юлын асыу ҙа. Иң мөһим осоро - бала сағында дөрөҫ йүнәлеш бирә алһаҡ, Гөлдәриә ҡыҙыбыҙ, беҙҙең маҡсаттарҙы тормошҡа ашырып, артабан ейәндәребеҙгә лә ошо һөйөүҙе еткерер.

Ҡала ысынбарлығын дөйөм күҙлектән сығып ҡарау өсөн унда тыуыу ғына етмәй. Уны ауыл менән сағыштырғанда ғына тулыраҡ картинаны күрергә була. Ҡалала оҙаҡ ваҡыт йәшәгән ҡайһы бер кешеләр яйлап башҡортлоғонан алыҫая бара. Ундай ғаиләләрҙә тыуған балалар бөтөнләй тамырҙарын белмәй үҫә. Ҡала - аҫтына ут яғылған ҡаҙан. Уның эсенә күпме ҡар төшһә лә, барыбер һыуға әйләнә. Ҡалаға яңы килгән кеше, ғәзәттә, башҡа кешеләр ыңғайына һоро бер төҫкә инә. Бына ошондай һоро төҫкә әүерелдермәҫ өсөн балаларҙы үҙ туған телендә һөйләштереп, үҙ мәҙәниәтенә ылыҡтырып үҫтереү кәрәк. Беҙ шуға ынтылабыҙ.

**Фәһим СӘҒӘҘӘТОВ.**

# ХОККЕЙ БУЙЫНСА ауылдарҙан да

**Һәр ауылдың, бигерәк тә боронғо ауылдарҙың, айырым кеше һымаҡ, үҙ йөҙө, характеры, холоҡ-фиғеле була. Ауылдағы ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар аша сағыла ул. Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылы ана шундай үҙенсәлекле ауылдарҙың береһе. Әлмөхәмәттәрҙең төп асылы шунда: был төбәктә бик күп билдәле шәхестәр тәпәй баҫҡан, илен данлаған. Бөгөн был ауыл донъяға яңыса, заманса бага - бәләкәй генә ауылда республика кимәлендә билдәле хоккей клубы бар. Һүҙҙе ошо "Аҡбуҙат" хоккей командаһының тренеры, әңгәмәсебеҙ Шафиҡ ХӘМИТОВҡа бирәйек.**

## Ауыл тарихы

Әлмөхәмәт ауылының боронғо исеме - Ҡолбаҡты. Ваҡытында ул "Буденный" колхозының үҙәге булған. 1954 йылда "Сиҙәм" совхозы төҙөлгәс, беҙҙең ауыл Булат, Әбдрәш ауылдары менән бергә яңы төҙөлгән хужалыҡҡа ҡушыла. Халыҡ үҙ теләге менән ҡушылғанмы, мәжбүри ҡушҡандармы, был турала бер ниндәй мәғлүмәт юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, ул йылдарҙа халыҡ теләгенә иғтибар булмағандыр ҙа - партия нисек хәл итә, шулай булырға тейеш кеүек ҡабул ителгән. Дүрт йөҙ йыллыҡ тарихы булған ауыл башҡа ауылдар ни кисерһә, шуны күргән. Күптән түгел ауылдашыбыҙ Ханнан хәҙрәттең иҫтәлегенә дин әһелдәренең ҙур йыйыны булып уҙҙы. Унда районыбыҙҙың, Сибайҙың имам-хатиптары ҡатнашты. Был бушҡа түгел, сөнки Ханнан хәҙрәт ваҡытында ауылда башлап мәҙрәсә асҡан, яҡын-тирәнең балаларына белем биргән. Ул йылдарҙа ауылда ике мәсет булған. Тимәк, Октябрь революцияһына тиклем ауылыбыҙ етеш йәшәгән, дини үҙәк булараҡ та билдәле булған. Әлмөхәмәт ауылы Әбйәлил районындағы Булат, Әбдрәш ауылдары менән бергә бөрйән ырыуына ҡараған өс ауылдың береһе. Элек ҡаҙаҡтар менән барымта-ҡарымта осоронда беҙҙең ата-бабалар ошо сик буйына һаҡсы булараҡ килеп төпләнгәндәр тип уйлайым.

Ауылыбыҙҙан республика кимәлендә билдәле булған күп кенә шәхестәр сыҡҡан. Башҡорт әҙәбиәтенең тәңҡит оҫтаһы Ким Әхмәтйәнов менән яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев - беҙҙең ауылдаштар. Йәшләй генә вафат булған яҡташыбыҙ шағир һәм драматург Рәмил Ҡол-Дәүләт менән дә беҙ хаҡлы ғорурланабыҙ. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сара Буранбаева ла беҙҙең ауылдыҡы. Фән докторы Вил Өмөтбаев та беҙҙең яҡташ. Ауылдан сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәргә бағышлап, музей асыу теләге менән йәшәйбеҙ. Материалдар туплана, уларҙы тулыландырып, музей асыу кәрәк. Яңы төҙөлөп ятҡан ФАП-тың бер бүлмәһен шул маҡсатта ҡулланыу өсөн вәғәҙә бирҙеләр былай.

Әлеге көндә ауылыбыҙҙа - йөҙ, күрше МТС-та (рәсми яҡтан ул Әлмөхәмәтҡә ҡарай) һикһән йорт иҫәпләнә.

Совхоз тарҡалып, заманалар кинәт үҙгәреп киткәс, ауылдаштарым сәйәсәтте дөрөҫ аңлап, фермер хужалыҡтары ойоштороп, шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеп, ауыл йөҙөн һаҡлап ҡалдылар. Совхоз осорондағы һөтсөләк фермаһын юҡҡа сығарҙылар - быныһы үкенесле, әлбиттә. Әлегә беҙҙәге фермерҙар башлыса ҡырсылыҡ менән шөғөлләнә. Әммә был ғына ауыл халҡын эш менән тәьмин итә алмай. Шуға күрә йәштәрҙең күбеһе Магнитогорск ҡалаһына йә булмаһа вахта ысулы менән йыраҡтарҙа йөрөп эшләргә мәжбүр. Йәштәр ситтә йөрөгәс, йылдан-йыл балалар һаны ла кәмей. Яңы йылдан һикһән балалы беҙҙең мәктәп Урал урта мәктәбенең филиалы итеп үҙгәртелде.

## Хоккей "ауырыуы"

Хоккей уйыны менән "ауырыу" үткән быуаттың 70-се йылдарында башланды. Ул ваҡыттағы СССР-ҙың йыйылма командаһы күптәр өсөн үрнәк булып торҙо. Харламов, Петров, Михайлов кеүек уйынсыларға, Третьяк кеүек ҡапҡа һаҡсыһына табынған һәр ауыл малайы ҡыш буйына боҙҙан ҡайтышманы. Беҙ ҙә йылғала шәре сығарып, хоккей майҙансыҡтары яһап, ҡараңғы төшөп күҙ бәйләнгәнсе шайба артынан ҡыуа инек. Ауылда уйнау менән генә хушһынмай, йылға буйлап күрше Сиҙәм ҡасабаһына, Булат ауылдарына ла барып сыға торғайныҡ. Бөгөн беҙҙең ауылдың хоккей командаһы район кимәлендә генә түгел, республика кимәлендә лә сығыш яһай икән, уңыш сығанағын ана шул етмешенсе йылдар башынан эҙләргә кәрәк. Маҡсатлы ынтылыш булмаһа, еңеү үҙе килмәй, әлбиттә.

## Тәүге ынтылыш

Үҙем студент йылдарында Өфөләге авиация заводының "Комета" исемле хоккей командаһында сығыш яһай торғайным. Урал урта мәктәбенә ҡайтып эш башлағас, директор Рәйсә Мөхәмәт ҡыҙы Мөхтәрова: "Ниндәй шөғөлдәрең бар: йырлай беләһеңме, бейейһеңме?" - тип һораны. "Бейей белмәйем, йырлаһам да үҙем өсөн генә йырлайым. Хоккей уйнарға яратам", - тип яуап бирҙем. "Улай булғас, әйҙә, хоккей командаһы төҙө", - тине ул. Шулай башланып китте тәүге ынтылыштар. Элек бала саҡта бергә уйнаған ҡорҙаштарымды бергә туплап, хоккей командаһы төҙөнөк. Совхоз директоры Шоғөров Рәсүл Иғдисам улы һүтелеп ятҡан ферманың таҡталарын майҙансыҡ төҙөү өсөн ҡулланырға рөхсәт итте. 1993 йылда тәүге хоккей корды төҙөнөк, яҡтылыҡ үткәрҙек, спорт инвентары һатып алдыҡ. Шул осорҙа биш-алты йәшлек кенә булған малайҙар, беҙгә ҡарап, боҙға баҫты. Бөгөнгә уйынсыларыбыҙ шул йылдарҙа ҡулдарына сәкән тотҡан балалар. Хәҙер беҙҙең әрме хеҙмәтенә тиклемге һәм әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡандарҙан торған ике командабыҙ бар. Егеттәр хоккейҙан тыш Урал урта мәктәбенең бокс секцияһында шөғөлләнделәр. Тренерҙары Вәкил Ишбулды улы Байғабулов егеттәргә дөйөм физик үҫеш өсөн мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Шуға ла беҙҙең ике быуын команда ла ныҡ сыныҡып үҫте.

***Әлбиттә, теләк булғанда, сығымдарҙы ҡапларҙай финанс булһа, ауылдар ҙа спортҡа йөҙ менән боролор ине. Милләттең киләсәген һау-сәләмәт, айныҡ кешеләр тәшкил итә, тип күп һөйләйбеҙ. Әммә әрме сафына алыныусы егеттәргә күҙ һалһаң, уларҙың күпселеге бәлтерәп төшкән дистрофиктарҙан тора. Элек бит улай булманы. Һәр ауылдың рәсми булмаған үҙ хоккей командаһы була торғайны. Ауыл егеттәре ҡалаһыҡылар менән сағыштырғанда күпкә сыҙамлы. Межгорьела Өфө командаһы менән уйнағанда беҙҙең бер пятерка тегеләрҙең өс пятеркаһының хәлен бөтөрҙө. Ысынлап, ауыл балалары физик яҡтан күпкә көслөрәк. Тегеләрҙең өс пятеркаһы бербер артлы боҙға сыға, беҙҙекеләр берәү, әммә бергәгә. Күренеп тора, ҡалаһыҡыларҙың шыуыу техникаһы камилыраҡ, әммә сыҙамлыҡтары юҡ, тиҙ арыйҙар. Шунда мин "дворцовый хоккей" менән "дворовый хоккей" араһындағы айырманы аңланым.***

## Тәүге еңеүҙәр

Ситкә сығып уйнауыбыҙ Белорет районының Абҙаҡ ауылынан башланды. Унда беҙ Межгорье командаһынан еңелеп, абҙаҡтарҙы еңеп ҡайттыҡ. 2006 йылда Мәләүез ҡалаһында уҙған "Алтын шайба" уйындарында ун ике команда араһында дүртенсе урынды яуланыҡ. Был беҙҙең өсөн генә түгел, район тарихында хоккей командаһының беренсе еңеүе булды. Республика кимәлендә үткән был ярыштарҙа беҙ хатта Стәрлетамаҡ һәм Мәләүез ҡалаһы командаларын еңеүгә өлгәштек. Ул ваҡытта әле артыҡ спорт кейемдәре лә, спорт кәрәк-яраҡтары ла юҡ ине. Шунан һуң ғына беҙгә иғтибар артты, район хакимиәте аҡсалата ярҙам күрһәтте. 2008 йылда Саҡмағошта үткән республика ярышында өсөнсө урынға сыҡтыҡ. 2009 йылда Межгорьела үткән ярыштарҙа ҡала һәм ауыл командалары айырым сығыш яһаны. Был юлы беҙ беренсе урын яуланыҡ.



***✓ Беҙ бөгөнгө көн менән генә йәшәмәйбеҙ, күсәгилешлек бар. Уҡыусы балалар ағаларының үрнәгендә хоккей менән шөғөлләнә. Әле яңыраҡ ҡына уҡыусылар командаһы район буйынса беренсе урын алды.***

# ЧЕМПИОНДАР... юл башлай

## Икенсе баш ҡала

Әлеге көндә районды̦ң йыйылма командаһы, Атауҙы ауылының өс егетен иҫәпкә алмағанда, беҙҙең ауылда тупланған. Уйынсыларыбыҙға ун ете-ун һигеҙ йәш, иң оло хоккейсыбыҙ егерме дүрт йәштә. Күптәре - студенттар. Вахта ысулы менән төрлө ерҙә эшләгәндәр ҙә бар. Атап әйткәндә, Ирсаев Тимур - эшҡыуар, ауылда йәшәй. Һөжүм итеүсебеҙ Йосопов Марат Магнитогорскиҙа уҡый. Рәфил Усманов - Урал урта мәктәбенең ун беренсе класс уҡыусыһы, Нәдир Йәғәфәров әле генә әрме сафтарынан ҡайтты. Улым Ғаяз Магнитогорск тау университетының беренсе курс студенты. Саяхов Руслан шул уҡ уҡыу йортонда өсөнсө курста белем ала. Ҡапҡа һаҡсыларыбыҙҙың береһе - Батталов Фидан Магнитогорскиҙа комбинатта эшләй, Усманов Айнур училищела уҡый. Команда шулай тырым-тырағай төрлө ерҙә булыуға ҡарамаҫтан, һәр шәмбе-йәкшәмбе көндәрендә күнекмәгә ауылдағы хоккей кордына йыйылабыҙ. Яңы йылға тиклем, алдан килешеп, аҙнаһына бер тапҡыр Магнитогорскиҙың боҙ аренаһында шөғөлләндек. Городтыҡылар (әбйәлилдәр Магнитогорскиҙы "город" тип йөрөтә) беҙҙең кимәлдә белә, шуға күрә бушлай шөғөлләнергә рөхсәт итәләр. Атауҙы ауылынан Ҡужин Русланға Магнитогорскиҙың "Белые акулы" тигән йәштәр командаһына саҡырыу булды хатта. Беҙҙең Марат Йосоповҡа ла күҙ һалалар. Өфө - йыраҡ, город - эргәлә, ауыртмаған яҡҡа ҡоларға тура килә. Дөрөҫөн әйткәндә, патриотик тойғоларҙы иҫәпкә алмағанда, спорт өсөн административ сиктәр юҡ. Был йәһәттән әбйәлилдәр өсөн Магнитогорск икенсе баш ҡала һымаҡ.

## Йөрөгән таш шымара

Йөрөгән таш шымара тиҙәр, ысынлап та, үҙ һутыңда ғына ҡайнап шымарып булмай. Шуға күрә һәр мөмкинлектә файҙаланып, йышыраҡ ситтәге уйындарҙа ҡатнашырға тырышабыҙ. Һанай китһәң, Шишмәлә, Раевкала, Саҡмағошта, Мәләүездә, Учалыла, Инйәрҙә, Межгорьела, Сибайҙа, Абҙаҡта, Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында, Ҡыҙыл районында булдыҡ. Ғөмүмән, республика спорт комитеты ойоштарған бар ярыштарҙан да ситтә ҡалмайбыҙ. Былтыр Сибай хоккей клубына нигеҙ һалған Антонов кубогы ярыштарында ҡатнаштыҡ, быйыл да унда барҙыҡ. Был бик мәртәбәле ярыш. Унда Силәбе өлкәһенән Магнитогорск ҡалаһының, Буранный ҡасабаһының, Ырымбур өлкәһенең, Межгорьеның, Сибайҙың һәм беҙҙең "Аҡбуҙат" командаһы 26-27 февралдә яңы төҙөлгән "Ирәндек" боҙ аренаһында көс һынашты. Шулай йыл әйләнәһенә спорттан айырылмайбыҙ. Егеттәр физик яҡтан ныҡ үҫешкән булыуға ҡарамаҫтан, йәй көндәре лә тренировканан туктамайбыҙ, футбол, волейбол уйнайбыҙ. Уйынсыларыбыҙҙың алама ғәҙәттәре юҡ - улар араҡы эсеп, тәмәке тартып йөрөмәй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара. Әле Магнитогорскиҙа уҡыған егеттәр тренировканан тыш, үҙ аҡсаларын түләп, боҙ аренаһында конькиҙа шыуалар. Боҙ уларға алама ғәҙәттәр өсөн ваҡыт та ҡалдырмай.

## Көйәрмәндәр

Матди-техник базаға килгәндә, шөкөр, тибеҙ. Район башлығы Рим Һатыбал улы Сынғыҙов был йәһәттән бик ыңғай ҡарашлы кеше. Былтыр беҙҙең ауылда спонсорҙар ярҙамында уйын талаптарына тороплоҡ яңы хоккей майҙансығы төҙөлдө. Быйыл уйынсыларға сит ил фирмалары әҙерләгән хоккей формалары, спорт инвентары алдыҡ. Район хакимиәте бының өсөн ике йөҙ мең һум аҡса бүлде. Хәҙер беҙҙең кейем дә, конькиҙар ҙа, сәкәндәр ҙә профессионалдар кимәлендә. Был, әлбиттә, уйын һөҙөмтәһенә яҡшы йоғонто яһай. Ауылдаш эшҡыуарҙарға ҙур рәхмәт, хәлдәренән килгәнсә ярҙам итеп торалар. Үҙ автопарки булған шәхси эшҡыуар, Рәис ҡустым ярыштарға алып йөрөү өсөн автобус биреп тора. Ауылдаштар иһә беҙҙең төп көйәрмәндәр. Ситтән беҙгә килеп уйнағанда көйәрмәндәргә мохтажлыҡ кисермәйбеҙ, ауыл халҡы өсөн бындай уйындар үҙенә күрә ҙур байрамға әйләнә.

## "Дворцовый" хоккей һәм "дворовый" хоккей

Беҙ бөгөнгө көн менән генә йәшәмәйбеҙ, күсәгилешлек бар. Уҡыусы балалар ағаларының үрнәгендә хоккей менән шөғөлләнә. Әле яңыраҡ ҡына уҡыусылар командаһы район буйынса беренсе урын алды. Шуныһы үкенесле, былтыр район ярышында алты команда ҡатнашҡайны, быйыл өс кенә команда булды. Бөгөнгө балаларҙы компьютерҙан айырып алыуы ҡыйын. Бәләкәй ауылдар өсөн тағы бер проблема - уйынсыларҙы һайлап алыу өсөн беҙҙә мөмкинлектәр әҙерәк. Ваҡыт еткерә алмай киткән саҡтар ҙа була: минең төп вазифам - мәктәп директоры, хоккей менән, тренер булараҡ, йәмәғәт башланғысында шөғөлләнәм тиһәң дә була. Район үҙәгендә бер түгел, ике хоккей майҙансығы бар, әммә һөҙөмтәһе юҡ. Ҡәҙерен белгәндә, хоккей менән ихласлап шөғөлләнеү өсөн беҙҙең райондың географик урыны бик уңайлы. Эргәбеҙҙә генә донъя хоккей лигаһының командаһы - Магнитогорскиҙың "Металлург"ы бар. Бындай мөмкинлек күп райондарға тәтемәй. Етмәһә, Магнитогорскиҙың аэропорты, ял йорттары беҙҙең территорияла урынлашҡан. Күрше булараҡ, беҙ ҙә уларҙың файҙаһын күрергә тейеш. Әбйәлилдәрҙең яртыһы тиерлек Мәғниткә йөрөп эшләй, көндәлек тормошобоҙ күптән инде эргәбеҙҙәге ҡалаға бәйле. Ул, дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт ҡалаһына әйләнеп бара. Күрше урынлашҡан ҡаланың файҙаһын күрмәү яҙыҡ булыр ине. Ни өсөн тигәндә, ҡалала спорт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар күберәк. Әлбиттә, теләк булғанда, сығымдарҙы ҡапларҙай финанс булһа, ауылдар ҙа спортҡа йөҙ менән боролор ине. Милләттең киләсәген һау-сәләмәт, айныҡ кешеләр тәшкил итә, тип күп һөйләйбеҙ. Әммә әрме сафына алыныусы егеттәргә күҙ һалһаң, уларҙың күпселеге бәлтерәп төшкән дистрофиктарҙан тора. Элек бит улай булманы. Һәр ауылдың рәсми булмаған үҙ хоккей командаһы була торғайны. Ауыл егеттәре ҡаланыҡылар менән сағыштырғанда күпкә сыҙамлы. Межгорьела Өфө командаһы менән уйнағанда беҙҙең бер пятерка тегеләрҙең өс пятеркаһының хәлен бөтөрҙө. Ысынлап, ауыл балалары физик яҡтан күпкә көслөрәк. Тегеләрҙең өс пятеркаһы бер-бер артлы боҙға сыға, беҙҙекеләр берәү, әммә берәгәй. Күренеп тора, ҡаланыҡыларҙың шыуыу техникаһы камилыраҡ, әммә сыҙамлыҡтары юҡ, тиҙ арыйҙар. Шунда мин "дворцовый хоккей" менән "дворовый хоккей" араһындағы айырманы аңланым. Хоккей уйынының төп үҙенсәлеге шунда: бында берәү - бөтәһе өсөн, бөтәһе - берәү өсөн. Берҙәм рух булмайынса, еңеүгә өлгәшеүе ҡыйын. Беҙҙә ул бар. Ауыл кешеләре бер-береһен яҡшы белә - был да үҙенә күрә туплаусы көс.

## Ир маҡтаныр, ҡорамал эшләр

Хоккей көслөләр уйыны булыуға ҡарамаҫтан, бында ла үҙ нескәлектәре, серҙәре бар. Мәҫәлән, бер генә уйынсының конькийы дөрөҫ ҡырланмаған булһа ла, ул дөйөм һөҙөмтәгә йоғонто яһай. Элек конькиҙарҙы, ғәҙәттә, үҙем ҡырлай торғайным, хәҙер йылдан-йыл оҫтарабыҙ. Магнитогорскиҙың "Металлург"ында лазер ярҙамында ҡырыусы бик ҡиммәтле станок барлығын белеп ҡалдыҡ та, шунда барабыҙ. Күршеләр хатта беҙгә льгота эшләп, хаҡты осһоҙораҡ ҡуйҙылар. Ир маҡтаныр, ҡорамал эшләр тигәндәй, дөрөҫ ҡырланған конькиҙарҙа шыуыу үҙе бер ләззәт, шыуыу тиҙлеге лә бермә-бер арта. Хатта торған ерҙән эйелһәң дә ундай конькиҙар үҙенән-үҙе шыуып китә. Ҡыҫҡаһы, хоккей уйынының нескәлектәрен аҙағынаса төшөнөп бөтөп тә булмай - бәлки, был уйындың ижади булыуы тап ошондалыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беренсенән, "Аҡбуҙат"тарға ҡыйыуҙар уйынында еңеүҙәр юлдаш булһын, тип теләйек. Спорттың башҡа төрҙәре буйынса ауыл йөҙөн билдәләгәндәй ҡаҙаныштары булғандарҙан хәбәрҙәр көтөп ҡалабыҙ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

---

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# АҪЫЛ ИРҘӘР - ИЛ КҮРКЕ

**Өйләнгән ир ниндәй яҙылмаған ҡанундарға таянырға тейеш?**

**Тимур Кәримов:** Ир кеше, ғаилә башлығы булараҡ, уны матди яҡтан тәьмин итергә, уға ныҡлы терәк булырға, балаларына сәләмәт йәшәү рәүеше өлгөһө күрһәтергә, йәшәйештә хәл иткес ҡарарҙарҙы үҙе сығара белергә тейеш. Тимәк, өйләнгән ир өсөн яҙылмаған ҡанун - ғаиләһенең етеш, һаҡлаулы, сәләмәт булыуын тәьмин итеү бурысын атҡарыу.

**Әхәт Ишбулатов:** Өйләнеп, донъя көтә башлаған ир, өйләнмәгән сағында үҙендә булған һауалылыҡ, эгоизм кеүек алама ғәҙәттәренән ҡотолоу яғын ҡарарға тейеш. Шунһыҙ, бөтөн ғаилә ҡороу мөмкин түгел. Мәҫәлән, тәмәке тартҡан ир йылына ун ике тоҡ он алырлыҡ аҡсаһын төтөн итеп өрөп юҡҡа сығара икән, был ғаилә ағзалары өсөн оло һынау. Бер тоҡ он 5-6 кешелек ғаиләне бер ай буйы икмәккә туйындырырға етә. Ғаиләле ир ҡатыны, балалары һәм матди донъяһы өсөн үҙ өҫтөнә бик ҙур яуаплылыҡ ала. Үҙе үк балалары ауыҙынан икмәкте тартып алып, төтөн итеп өрә икән, ир кеше намыҫы өсөн был дөйә морононан да ҡырын эш. Ғаиләһенә хеҙмәт иткән ир һаулығын фиҙа ҡылһа ҡыла, ә балаларын туйындырыу өсөн бар көсөн һала. Сөнки балаларын етеш һәм бәхетле итеү - атай кеше өсөн иң төп ҡанун.

**Вил Булатов:** "Ғаилә-дәүләт" башлығы, ҡарарҙар ҡабул итеүсе, ҡатынын, балаларын яҡлаусы, "карапҡа" йүнәлеш биреүсе, йәшәү асылын эҙләүсе кеше булараҡ, ирҙең иң төп ҡануны - аңлылыҡ. Ғилемле булыу эштә, карьерала ныҡыраҡ ярҙам итһә, аңлы булыу ир-егеттең үҙенә генә түгел, ә уның киләһе быуындарына ла файҙа килтерерлек сифат. Батырҙар ҙа аңлы булған өсөн генә башҡаларға дөрөҫ юл күрһәтә алған. Тарихта ялған, яһалма әйберҙәр тиҙ юҡҡа сыға. Хәҡиҡәт һәм хәҡиҡәтте халыҡҡа иҫбат итеүсе батырҙар ғына халыҡ хәтерендә оҙаҡ йәшәй. Шуға күрә, тәбиғәт ирҙән аңлы булыуҙы талап итә. Икенсе ҡанун - ир бала тәрбиәләүҙе үҙ ҡулына алыу, ә ҡыҙ бала тәрбиәһен әсә кешегә тапшырып, ҡатынына был эштә кәңәштәре менән ярҙам итеү. Ошо ике ҡанунды үтәй икән, тимәк, ир - яҡшы ир, яҡшы атай, ниндәйҙер дәрәжәлә батыр ҙа.

**Тимерғәле Әхтәмов:** Ғаиләлә ниндәй генә хәл килеп сыҡмаһын, үҙ һүҙен әйтер алдынан ир кеше ҡатынының һүҙенә ҡолаҡ һалырға, уның фекере менән иҫәпләшергә тейеш. Тәүге ҡанун - ҡатыны менән бер ҡатарҙан эш итеү. Бөгөнгө көндә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, эшһеҙлек - ирҙәр алдында торған ауыр һынау. Ирҙәр йүнле эш таба алмағанлыҡтан, кредит түләй алмаған ғаиләләр күбәйҙе. Ғаилә башлығы үҙе генә аҡса эҙләргә тейеш тигән фекер, минеңсә, бөгөн актуаль түгел. Ғаиләне туйҙырыр өсөн ир кешегә лә, ҡатын кешегә лә берҙәй тырышып аҡса эшләргә тура килә. Заман шуны талап итә бөгөн.

**Ғәлимйән Иҙелбаев:** Ир һәр саҡта ла ир була белһен. Ғаиләлә хужа булһын, өйҙәге тыныслыҡты һаҡлаһын. Бының өсөн дөйөм ығы-зығынан бер башҡа юғарыраҡ булыу шарт. Ир кеше бер ниҙән дә ҡурҡмаһын, дөрөҫлөктө кәрәк саҡта шартлатып әйтә алһын, ошаҡты һәм кеше һүҙен йөрөтмәһен. Өйләнгәндәр өсөн төп ҡанундар шул.

**Юлай Ғәйнетдинов:** "Йәшел генә билбау ай бил күрке, аҫыл ғына ирҙәр ил күрке..." тигән халҡыбыҙ һүҙҙәре менән генә был һорауға яуап бирәм. Төп ҡанун - ил күрке булыу.

**Илгиз РӘХИМОВ яҙып алды.**

***✓ Ҡаҙан ҡалаһында тағы ла бер уйындан һуң командалар артабанғы көс һынашыуҙы Өфөлә дауам итәсәк. Нисек кенә булмаһын, "Аҡ Барс"ты еңеүгә "Салауат Юлаев" барлыҡ тырышлығын, оҫталығын һаласағына шик юҡ.***

*ХОККЕЙ*

# ЫСЫН ИРҘӘР ГЕНӘ...

## хоккей уйнай һәм еңеү яулай

**(Башы 1-се биттә).**

Хоккей ул, тәү сиратта, уйынсынан ныҡлы рух, ихтыяр көсө талап иткән ауыр эш. Шулай булмаһа, ҡылдай нәҙек тимер өҫтөнә ҡыйыулыҡ етеп баҫып, иҫ киткес хәрәкәттәр башҡарып булмайҙыр ул. Хоккейсының һөнәри оҫталығы нәҡ конькиҙа яҡшы йөрөүендә икәнен билдәләй белгестәр. Хоккей - һөжүм итеүселәр уйыны тип әйтһәк тә яңылышмабыҙ. Сөнки күберәк гол индергән һайын, уйын да шул тиклем күңеллерәк, камилыраҡ тамашаға әйләнә. Хоккей - ул, тәү сиратта, һөҙөмтәле комбинациялар уйыны. Һәм нәҡ һөжүм итеүселәрҙең уйыны хоккей эстәлегенең күпселек өлөшөн тәшкил итә. Был йәһәттән "Салауат Юлаев" командаһы көслө бомбордирҙарҙан унды. Норвегия гражданы Патрик Торесен, Швеция һәм Канада гражданы Роберт Ниллсон, Чехия гражданы Якуб Клепиш, Александр Радулов, Андрей Таратухин, Петр Счастливый, команданың капитаны Виктор Козлов, Игорь Григоренко, Владимир Антипов, Александр Свитов, Сергей Зиновьев, Константин Кольцов команданың төп көстәре. Командаға күптән түгел килеүсе Олег Сапрыкин, шулай уҡ "Салауат Юлаев" мәктәбе тәрбиәләнеүселәре Кирилл Полозов, Александр Панков, Владислав Картаевтарҙың йәшлек көсө тәжрибә янына өҫтәлеп, командаға яңы һулыш өрөп, тағы ла бейегерәк баҫҡыстарға үрләтеренә шик юҡ. Бының шулай булырын К.Полозов, А.Панков, О.Сапрыкиндың ҡыҫҡа ғына арауыҡ эсендә үҙҙәрен оҫта хоккейсылар итеп танытырға өлгөрөүе лә асыҡ дәлилләй.

Барлыҡ хоккей һөйөүселәрҙең иң яратҡан уйынсыһы, КХЛ-дың иң көслө бомбардиры исемен алған Түбәнге Тагил егете Александр Радулов хаҡында айырым әйтеп үтмәй булмай. "Салауат Юлаев" командаһында ул өсөнсө сезон уйындарын үткәрә. Иң яҡшы уйынсыларҙың береһе булған Александр Радулов клуб өсөн уйнаған тәүге ике сезонда уҡ үҙенең оҫталығы менән генә түгел, ҡыҙыулығы, командалағы һәр иптәшен яҡларға ынтылыуы менән дә хоккей һөйөүселәрҙең күңелен яуланы. Уның хоккейсы өсөн мөһим булған һәр техниканы - ул конькиҙа оҫта шыуыу булһынмы, төрлө бороloштар (ә улар хоккейҙа үҙҙәре генә дүрт төрлө), клюшканы йәки йығылған уйынсыны һикереп йә урап үтеү кеүек алымдар булһынмы -барыһы ла Александр Радуловҡа еңел бирелә, ләкин һәр хәрәкәттең артында ауыр һәм ныҡышмалы күнегеүҙәр ятыуын аңлауы ҡыйын түгел. Уның уйыны хоккейға бер мәртәбә өҫтәй. Республиканың хоккей яратыусылары шатлығына Александр Радулов Өфө командаһы менән 2014 йылға тиклем контрактын оҙайтһа, уның звено буйынса партнеры, һөҙөмтәле һәм мауыҡтырғыс уйыны менән ҙур танылыу яулаған Патрик Торесендың ошо сезондан һуң кире океан аръяғына китеүе мөмкин. Шулай була ҡалһа, әлбиттә, бик йәл, сөнки Радулов һәм Торесендың тандемы, уйыны күп осраҡта ҡаршы яҡ команданың һаҡлаусыларына, ҡапҡа һаҡсыһына бер ниндәй өмөт ҡалдырмай.

Команданың һаҡлаусылар звеноһында уйнаған хоккейсылар Кирилл Кольцов, чех Мирослав Блатяк, Виталий Прошкин, Андрей Кутейкин, Олег Твердовский, Дмитрий Калинин, Максим Кондратьев һәм словак Томаш Староста исемдәре хоккей яратыусыларға яҡшы таныш. Һәр уйында уларҙың оҫталыҡҡа ҡоролған һаҡлау оборонаһын күҙәтәбеҙ. Сыҙамлыҡҡа, зирәклеккә эйә булған уйынсы ғына һаҡлаусы булараҡ сығыш яһай ала хоккейҙа. Өфө командаһы һаҡлаусылары нәҡ ошондай сифаттарға эйә. "Автомобилист"ан ғинуар айында ғына килгән Александр Рязанцев та көслө хоккейсыларҙың береһе икәнлеген күрһәтеп өлгөрҙө. Шулай уҡ "Салауат Юлаев" хоккей мәктәбендә тәрбиәләнгән Михаил Григорьев, Вячеслав Селуянов, Илдар Иҫәнғоловтың командa өсөн файҙалы уйынсылар булып китеүенә ышаныс көслө. Кирилл Кольцовтың Омск "Авангард"ына күсеүе хаҡында һүҙҙәр булһа ла, оҫта хоккейсының "Салауат Юлаев" командаһында ҡалыуы ҡыуаныслы хәл. Кирилл Кольцов һәм уның менән бер парҙа уйнаған Дмитрий Калининды баш тренер Вячеслав Быков Рәсәй йыйылма командаһы составында ла күрергә теләүен йәшермәй. Был факт беҙҙең командала бөтөн илдең намыҫын донъя кимәлендә яҡлай алырлыҡ спортсылар уйнауын күрһәтә. Ғөмүмән, Рәсәй йыйылма командаһы составында юлаевсыларҙың күп булыуы һәм уңышлы уйнауы яҡшы мәғлүм.

Ләкин һөжүм итеүселәр һәм һаҡлаусылар нисек кенә көслө уйнамаһын, ҡапҡасыларға эштең тағы ла ауырырағы тура килә. Уларҙың ҡыҙыу моментта һалҡын ҡанлылыҡ һаҡлай белеүе, такт һиҙгерлеге, сос һәм таһыл булыуы команданы еңелеүҙәрҙән һаҡлай. Бер нисә сезон юлаевсылар ҡапҡаһын Рәсәй йыйылма командаһы составында ике йыл рәттән (2008, 2009 йылдар) донъя чемпионы исемен яулаған Александр Еременко һаҡлай. Шулай уҡ уның менән бер рәттән "Салауат Юлаев" командаһы ҡапҡаһының "ябыҡ" булыуына өсөнсө йыл Виталий Колесник та яуаплы. Былтырғы йылдың октябрь айында юлаевсыларҙың һаҡсылар рәтен тулыландырған швед Эрик Эрсберг тренерҙар һәм хоккей яратыусылар ҡыуанысына өфөләләр ҡапҡаһын ышанызлы һәм ныҡлы һаҡлай. Ошо сезондың аҙағына тиклем генә төҙөлгән контрактты Эрик Эрсберг һәм хоккей клубы артабан да һуҙырмы, күрербеҙ.

Командала бер-береһен аңлап, һөҙөмтәле уйнау серҙәрен хоккейсыларға тренер төшөндөрә. Ул уйынсыларҙың ныҡлы ҡалҡаны. "Салауат Юлаев" командаһының тренер штабы көслө һәм тәжрибәле тренерҙарҙан тора. Өфө командаһының баш тренеры Вячеслав Быков һәм өлкән тренер Игорь Захаркиндың Рәсәй йыйылма командаһының да тренерҙары булыуы юлаевсыларҙың өҫтөнә айырыуса яуаплылыҡ һала. Ләкин Вячеслав Быковтың Башҡортостан командаһында ла, Рәсәй йыйылма командаһында ла тренер булып эшләүенә кире ҡараусылар ҙа байтаҡ. Уларҙың фекеренсә, тренерҙың барлыҡ оҫталығы, көсө, тәжрибәһе бер генә команданы әҙерләүгә йүнәлтелгән булырға тейеш. Нисек кенә булмаһын, был сезонда "Салауат Юлаев" командаһының еңеүен хоккейсылар һәм тренерҙар ғына түгел, ә тәү сиратта меңәрләгән хоккей һөйөүселәр ышанып көтә. Тәүге уйындарҙы юлаевсылар бик тә уңышлы башлап, Новосибирскиҙың "Себер" командаһын плей-оффтан төшөп ҡалырға мәжбүр итте. Өфөләләрҙең үҙ уйынсыларына ҡарағанда оҫтараҡ хоккейсылар булыуын "Себер"ҙең баш тренеры Андрей Тарасенко ла таныны һәм "Салауат Юлаев" командаһының Гагарин кубогында алтын миҙал яуларға тейешле иң көслө командаларҙың береһе икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Артабанғы уйындарын "Салауат Юлаев" үҙенең принципиаль ярышташы "Аҡ Барс" командаһы менән Ҡаҙан ҡалаһында дауам итә. Ике күршеләш республиканың командалары уйындарына ҡыҙыҡһыныу бик көслө. Нәҡ Ҡаҙан ҡалаһы хоккейсылары былтырғы уйындарҙың плей-оффынан өфөләләрҙең төшөп ҡалыуында "ғәйепле". Тағы ла шундай үҙенсәлек бар: ғәҙәттә, нәҡ ошо матчтарҙың еңеүсеһе Рәсәй чемпионы исемен яулай. 2006, 2010 йылдарҙа "Аҡ Барс", ә 2008 йылда "Салауат Юлаев" командаһы ошондай еңеү яуланы. Быйыл хоккей буйынса Рәсәй чемпионаты ниндәй һөҙөмтәләр менән тамамланыуын артабанғы уйындар күрһәтер. Ҡаҙан ҡалаһында тағы ла бер уйындан һуң командалар артабанғы көс һынашыуҙы Өфөлә дауам итәсәк. Нисек кенә булмаһын, ике тапҡыр Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ "Аҡ Барс"ты еңеүгә "Салауат Юлаев" барлыҡ тырышлығын, һөнәри оҫталығын һаласағына шик юҡ. Матур башланған плей-офф Өфө хоккей командаһы көйәрмәндәре өсөн артабан да тик шатлыҡлы минуттар килтерер тип ышанабыҙ.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Илдең ғәмәлдәге чемпионы "Аҡ Барс" һәм Континенталь хоккей лигаһының иң көслө командаларының береһе "Салауат Юлаев" командаһының көс һынашыуы үтә көсөргәнешле, үтә сәмле буласағы алдан уҡ төҫмөрләнде. Майҙан хужалары беренсе минуттан уҡ көслө һөжүмгә ташланды. Дүртенсе минутта ҡаҙандарҙың иң яҡшы һөжүмсеһе Данис Зарипов иҫәпте асты. Артабан юлаевсылар уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды, ә икенсе осор башында Игорь Григоренко тәүге шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына сәпәне. Осор аҙағында Мирослав Блатяк икенсе шайбаны индерҙе. Иҫәп 2:1 булды.**

**"Аҡ Барс" өсөнсө осорҙа уйын тиҙлеген арттырҙы һәм иҫәпте тигеҙләне. Кемдең еңеүсе булыуын төп уйын ваҡыты асыҡламаны. Юлаевсылар өҫтәмә ваҡытта ғына өсөнсө, еңеүле шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына индерә алды. Владимир Антипов һуҡҡан шайба еңеү тәьмин итте.**

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ШӘХСИ ТОРМОШОНДО...
## бегония ярҙамында көйлә

■ Диетологтар әйтеүенсә, витаминдарҙың организмға кәрәкле күләмен аҙыҡ-түлек аша алып бөтөп булмай. Француз ғалимдары үҙҙәренең һығымталарын күргәҙмә миҫал менән дә дәлилләп ҡуя. Мәҫәлән, кеше өсөн С витамининың тәүлек нормаһын тулыландырыу өсөн алты әфлисун ашарға кәрәк. Организмды Д витамины менән тулыландырыу өсөн 400 грамм ит һәм 1 килограмм 300 грамм икмәк ашарға тура киләсәк.

■ Сәләмәт булғығыҙ килһә, үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырмағыҙ һәм көнләшмәгеҙ, тип белдерә Канаданың Конкордия университеты ғалимдары. Улар кешенең иммунитеты һәм гормональ фоны уның социаль торошо менән бәйле булыуын асыҡлаған. Эксперимент күрһәтеүенсә, үҙҙәрен уңышлы кешеләр менән сағыштырып, файҙаның үҙҙәре иҫәбенә булмауына зарланырға яратыусыларҙың иммунитеты ла түбән булған, гормондар дисбалансы ла күҙәтелгән. Дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында үҙен кәрәкле кеше тип тойоусыларҙың кәйефе лә яҡшы икән, төрлө вирустарға ла бирешеп бармайҙар, имеш.

■ Психологтар әйтеүенсә, оло кешеләр араһында теге йәки был нәмәнән, ниндәйҙер тойғоларҙан ҡурҡыусылар байтаҡ ҡына. Баҡтиһаң, быны булдырмау өсөн бала бәләкәй саҡта уға телевизорҙан күрһәтелгән хәүефле яңылыҡтарҙы ҡарарға рөхсәт итмәҫкә кәрәк икән. Бала ишеткән йәки күргән мәғлүмәтте йөрәгенә яҡын ала, ул үҙен был ҡурҡыныс ваҡиғаларҙың ҡатнашыусыһы тип күҙ алдына килтерә башлай. Шуға ла телевизорҙан һыу баҫыу тураһындағы тапшырыу ҡарағандан һуң кеше ҙурайғас та һыуҙан ҡурҡыуы ихтимал.

■ Әгәр ҙә фэн-шуйға ышанһаң, ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе, матди килемде, сәләмәтлекте үҫемлектәрҙең энергияһы ярҙамында көйләргә була. Белгестәр әйтеүенсә, амариллис ғашиҡтар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшырта. Фэн-шуй буйынса, адиантум - ҡатын-ҡыҙ үҫемлеге. Ул гүзәл затҡа ярҙам итә. Ҡытай раузаһы ир менән ҡатындың тойғоларын тағы ла сағыуыраҡ итергә һәләтле. Тормошоғоҙҙа үҙгәрештәр булыуын теләһәгеҙ, бегониялар үрсетегеҙ. Фэн-шуй белгестәре әйтеүенсә, тап бегониялар шәхси тормошто яйға һалырға булышлыҡ итә. Алһыу, ҡыҙыл һәм ҡыҙғылт һары төҫтә сәскә атыусы бегонияларҙы бер көршәккә ултыртһағыҙ, рух күтәренкелеге, шулай уҡ енси энергия көсәйеүен тойорһоғоҙ.

■ Британия ғалимдары белдереүенсә, 25 процент осраҡта табиптар кешеләргә "артериаль гипертензия" тигән диагнозды яңылыш ҡуя. Быны аңлатыуы бик ябай: кешеләр дауаханаға килеү, аҡ халатлы табип менән әңгәмәләшеү көсөргәнеш тыуҙыра һәм уның артериаль ҡан баҫымы күтәрелә. Һөҙөмтәлә, беренсенән, уға диагноз дөрөҫ ҡуйылмай, икенсенән, ул "һауыҡҡансы" гипертониянан дарыуҙар эсергә мәжбүр була. Эксперименттар күрһәтеүенсә, бындай пациенттарҙың дүрттән бер өлөшө һау-сәләмәт була. Бындай күңелһеҙ хәлгә тарымаҫ өсөн өйөгөҙҙә мотлаҡ рәүештә ҡан баҫымын үлсәй торған прибор - тонометр булырға тейеш. Артериаль ҡан баҫымын даими контролдә тотоу ғына дөрөҫ булмаған диагноздан ҡотҡара.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ -
## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

**Быуаттар төпкөлөнә күҙ һалһаҡ...**

**Тарихсылар раҫлауынса, тәү осор кешеһе урманда осраҡлы ғына табылған күстәрҙән бал алған. Тәмле аҙыҡты тартып алыу ысулы ла артыҡ ҡатмарлы булмаған. Бының өсөн бары бал ҡорттары йәшәгән ағасты йыҡҡандар. Әммә өйрәнеүҙәр шуны күрһәтә - ваҡыт үткән һайын бындай тәмле аҙыҡ халыҡ йәшәйешендә ниндәйҙер мөһим урын алған. Шуға күрә кеше бал ҡорттарына осраҡлы табыш итеүҙән уларға һунар итеү юлына баҫҡан. Тәүге һунар нисек булғандыр ҙа тәүге һунарсы кем булғандыр инде. Был асылмаған сер булып ҡалыр, ахыры. Ә шулай ҙа быуаттар төпкөлөнә сәйәхәт яһап, был хәлде үҙебеҙсә күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Кем белә, бәлки, һунарсының бал ҡорттарына тәүге һунары ошолай булғандыр.**

Ҡәбилә тормошо һәүетемсә генә аға бирә. Аллаға шөкөр, быйыл йыл апаруҡ ҡына иңғай барған төҫлө. Бына кисәге һунар ҙа бик уңышлы килеп сыҡты былай. Шуға күрә барыһының да күңелдәре күр, тауыштары шат бөгөн. Ә шулай ҙа һунарсының ғына күңеле урынында түгел. Бына нисәнсе көн инде ҡәрҙәштәренең һынамсыл ҡараштарын тойоп йөрөй ул. Ҡәбилә башлығының бөгөн булмаһа иртән саҡырасағын да һиҙә. Хатта ниндәйерәк эш ҡушыуын да самалай һунарсы. Әммә уны нисек тормошҡа ашырырға икән - бына ошо уй тынғы бирмәй уға.

Һиҙемләүе дөрөҫҡә сыҡты һунарсының. Бындай сетерекле эш ҡушылырын көтөп йөрөһә лә, ҡушылған йомошто ишеткәс, ниндәйҙер мәлгә албырған ҡалғандай булды. Әлбиттә, быны ҡәбилә башлығы ла аңлап тора. Ана бит, уның тауышында бойороҡтан бигерәк үтенес ауаздары күберәк. Эш шунда икән. Уҫал безелдәктәрҙең (бал ҡорттарын шулай тип атаны улар) тәмле аҙығы, йәғни балы кәрәк! Әммә хәҙер йәй уртаһы, ә быға тиклем балды гел ҡыш көндәре ала килделәр. Йәй көнө бер ваҡытта ла алғандары булманы. Әммә бойороҡтоң сәбәбе бик етди - ҡәбилә башлығының өлкән улы атай булырға йыйына! Ҡара һин уны, яңы ғына үҙе ыштанһыҙ йүгереп йөрөй ине. Хәҙер бына атай булырға йөрөй. Ошо турала уйлап, һунарсы көләмһерәп ҡуйҙы. Ә шулай ҙа тормош тигәндәре бигерәк ҡыҙыҡ икән. Бына әле бала тыуып та өлгөрмәгән, ә үҙе шунда уҡ өлкән быуынды маҙаһыҙлай башланы түгелме?! Бер ни хәл итеп булмай, яңы быуын хаҡына тырышырға тура килер инде. Һунарсы ризалығын белгертеп, әйгән бер һелкеп алды ла сығыу яғына йүнәлде.

Таң менән урманға йыйынды ул. Үҙ индәренә мөһим бурыс йөкмәп урманға юлланған һунарсының барлыҡ ҡәрҙәштәре өнһеҙ ҡараштары менән оҙатып ҡалды. Уның һәлмәк кенә атлап барған көүҙәһе урманға инеп юғалғас та ҡәбилә башлығының улы, буласаҡ атай, хәтһеҙ ваҡыт тора бирҙе әле. Уңышһыҙ һунар булған осраҡта һунарсының буш ҡул менән ҡайтырын да аңлап тора ул, ә шулай ҙа үҙе барыбер ниндәйҙер мөғжизәгә өмөт итә. Күңелдә алдап булмай шул - һәр атай-әсәй үҙенең сабыйына бал ҡаптырыуҙы хыялында йөрөтә!

Ололар һөйләүе буйынса, элек яңы тыуған балаға май ҡаптырыр булғандар. Хәҙер бына майға ҡушып бал да ҡаптыралар. Ҡәрҙәштәренең ышаныуы буйынса бындай баланың тормошо тик бәхетле буласаҡ. Тормош һынауҙарын ул һис шикһеҙ күпкә еңелерәк үтәсәк. Әммә шуныһы бер аҙ үкенесле - бындай тәмле аҙыҡты ҡайһы бер сабыйға ҡаптырып булмаған осраҡтар ҙа булғылап тора. Бигерәк тә йәй көнө тыуғандарына. Юҡ, юҡ, Аллам һаҡлаһын, бында берәүҙе лә айырып ҡарамай. Бына әле урман буйлап китеп барған һунарсының батманы буш ҡайтҡан хәлдә лә уға берәү ҙә ҡырын ҡарамаясаҡ. Бөтә гәйеп теге уҫал безелдәктәрҙә. Бигерәк уҫал шул бал ҡорттары. Кеше түгел, хатта айыу үҙе лә кире сигенергә мәжбүр була бит. Ҡарағай олононан үкерә-үкерә төшөп, сәбәләнә-сәбәләнә ҡасып киткән тайыш табанды үҙ күҙҙәре менән күргән һунарсы йәй көнө уларға яҡынларға әлегә батырсылыҡ иткәне юҡ..

Урман буйлап һунарсы һаҡлыҡ менән генә атлап бара. Ситтән ҡарағанда ул бер ҙә бошмаған кеүек. Әммә уның башында хатта төшөнкөлөккә биреләрҙәй уйҙар ҡайнаша - нисек итеп бал ҡорттары йәшәгән ояны табырға ла нисек итеп унан тәмле аҙыҡты тартып алырға?! Ә шулай ҙа уның төбөн китеп барған урыны билдәле. Кисә кистән үк уйҙарында ғына урмандың һәр мөйөшөн барлап, күңеленә оҡшаған мөйөшөн билдәләп ҡуйғайны ул. Һуҙ ҙә юҡ, ике көнлөк юл араһындағы урманды ул биш бармағы кеүек белә. Иң тәүҙә ниәтләп сыҡҡан төбәккә барып етер кәрәк. Унан инде, насип итһә, моғайын, табыр үҙенә кәрәк ағасты. Бөтәһен дә яҡшыға юрарға кәрәк. Шулайтып үҙен тынысландырғандай булды һунарсы. Бөгөнгөләй етди сәбәп булмағас микән, быға тиклем күстәр йәшәгән ағастарҙы эҙләп торманы ул. Һунары фәҡәт бал ҡортона йүнәлтелмәне. Башҡа йәнлектәргә һунар иткән ваҡытта безелдәктәр ояһына осраҡлы ғына һуғыла торҙо. Ә бына балды һунарсы һәр ваҡыт ҡыш алыр булды. Тәмле аҙыҡты ҡырпаҡ ҡар яуған мәлдә уҫал безелдәктәрҙән һис ҡурҡмай алырға була. Ҡар төрән булмағас, урманда йөрөүе лә күпкә еңелерәк. Балта менән тумырып ағасты йығыуы ла ҡыйын түгел. Билдән көрт кисеп йөрөү түгел инде. Йығылған ағаста безелдәктәр йәшәгән ҡыуышлыҡты сапҡыслауы ла күпкә уңайлы. Был осор һирәкләп булһа ла һыуһар "ярҙам" иткәләп торҙо. Уның эҙе ҡайһы ваҡыт бал ҡорттарының ояһына алып барыр ине. Ә шулай ҙа һыуыҡҡа сәңкеп үлгән йән әйәләрен бер аҙ йәлләй ине һунарсы. Эстән генә уларҙан ғәфү үтенә-үтенә тәмле аҙыҡты тырызына

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ИНСУЛЬТ ТУРАҺЫНДА НИ БЕЛӘҺЕҢ?




**Беҙҙең барыбыҙ ҙа тиерлек нисек машина аҫтында ҡалмаҫҡа, һыуға батмаҫҡа, грипптан һаҡланырға, һыуыҡ алдырмаҫҡа аҙмы-күпме беләбеҙ. Сөнки быларҙы бәләкәйҙән өйрәтеп үҫтерәләр. Ә бына Рәсәйҙә үлем осрағының икенсе урынында торған инсульт ауырыуы хаҡында бөтөнләй тиерлек белмәйбеҙ. Статистика мәғлүмәттәре буйынса йыл һайын ер йөҙөндә 6 миллион, ә Рәсәйҙә 450 меңдән ашыу кешегә инсульт диагнозы ҡуйыла. Ауырыуҙың "йәшәрә" барыуы ла күҙәтелә. Ҡан тамырҙарының имгәнеүе йәки ҡан йөрөшөнөң боҙолоуын аңлатҡан был сирҙең симптомдарын, уны профилактикалау сараларын белеү үҙебеҙгә һәм туғандарыбыҙға ярҙам итеүҙең ышаныслы сараһы булып тора. Иҫкәртелгән, тимәк, ҡоралланған, ти халыҡ.**

Инсульт - ҡапыл барлыҡҡа килгән күренеш, ваҡиға түгел, ә оҙаҡ ваҡыт формалашҡан процесс. Ул ике төргә бүлеп йөрөтөлә: ишемик инсульт (баш мейеһе артерияларына ҡан килеүенең ҡырҡа кәмеүе) һәм геморрагик инсульт (баш мейеһенә ҡан һауыуы). Ишемик инсульт күп осраҡта төнөн йәки таңғы сәғәттәрҙә, ә геморрагик инсульт, киреһенсә, ауыр эш көнө уртаһында йәки кискә күҙәтелеүе мөмкин. Башҡа күп төрлө ауырыуҙар кеүек үк, инсульттың ҡырҡа киҫкенләшеүе иртә яҙ һәм ҡара көҙҙә була.

**Врачтар белдереүенсә, бындай хәлдең шаһиты булған һәр кем инсульттың билдәләрен ауырыуға ябай ғына өс һорау биреп асыҡлай ала:**

**- зарар күреүсенең йылмайыуын һорарға;**

**- унан ябай ғына һөйләмде дөрөҫ һәм бәйләнешле итеп әйттерер ҡарарға;**

**- ике ҡулын да күтәртеп ҡарарға.**

**Ошо һорауҙарҙы ауыр үтәһә, тимәк, зыян күреүсегә ашығыс рәүештә медицина ярҙамы саҡырыу мотлаҡ. Шулай уҡ инсульты асыҡлауҙың тағы ла бер ысулы: ул ауырыуҙан телен сығарып күрһәтеүен һорарға кәрәк. Әгәр ҙә тел ҡыйыш йәки дөрөҫ булмаған формала икән, тимәк, һеҙҙең алдығыҙҙа инсульттан зыян күреүсе.**

✓ *Һеҙ үҙегеҙгә барлыҡ байлыҡтарҙан ҡиммәт булған ысул менән ярҙам итә алаһығыҙ. Һүҙ Аллаһҡа яҡын асылышлы кеше булырға ҡамасаулаған деструктив эмоцияларҙы көйләү тураһында бара.*

тултырып алып ҡайтыр булды. Ҡәрҙәштәренең эскерһеҙ ҡыуаныуын күреп кенә бер аҙ тынысланғандай була торғайны. Ошо арала ғына ҡайын туҙынан эшләнгән тырызын батманға алыштырҙы. Ағасҡа соҡоп эшләнгән был һауыт тәүгеһенә ҡарағанда күпкә йәтешле булып сыҡты.

Ә шулай ҙа һунарсы үҙе генә белгән сере лә бар. Бал ҡорттарының геүләп осҡанын таҙғаҡтан күҙәтеп ултырғайны бер заман! Һунар итеү өсөн бик уңайлы урыны бар уның. Йәй ниндәй генә эҫе булмаһын, ә ошо һаҙмат урында һыу ҡоромай инде. Шуға күрә һыу эсергә күп йәнлектәр килә бында. Бындай урында һунарсы өсөн иң ышаныслы урын - ағас башы. Кәрәкле бейеклектәге ике ярыш ботаҡҡа һайғауҙарҙан һалып алынған урын таҙғаҡ тип атала. Ана шул таҙғаҡта ултырғанында күрше ағаста ғына йәшәп ятҡан күсте шәйләп ҡалды ул! Ҡороған ағас ботағы төбөнән ҡалай йәтеш осорға урын эшләп алғандар бит әле. Геүләп осоп эшләп тик йөрөйҙәр. Ҡара әле, безелдәктәрҙе бимазаламаһаң, улар кешене баҫтырмай икән дәбаһа! Хатта бөжәктәрҙең ҡайҙа табан осҡандарын да самалағандай булды - улар яландағы төрлө сәскәләргә оса, буғай. Шулайҙыр, яландағы үҫемлектәрҙең, урмандағы йүкә-сағандың сәскәләрендә йыш осрай бит был безелдәктәр. Ҡыҙыҡһынып, һунарсы сәскә тажын тәмләп ҡарағаны ла бар. Биллаһи, сәскә һутын һурғанда бал тәмен тойғандай итә ул.

Көн кискә ауышҡанда урман төпкөлөндәге апаруҡ ҡына ҙур яланға барып сыҡты һунарсы. Аллаға шөкөр, уйлаған төбәгенә яңылышмайаҙашмай килеп сығырға насип иткән икән. Тәүҙә һунарсы төрлө төҫтәр менән күҙҙең яуын алып ултырған сәскәләргә иғтибар итте. Ниәте - теге безелдәктәр күренмәҫ микән дә уларҙың осоу йүнәлешен самалап оялашарын билдәләп булмаҫ микән. Сәскәләргә иғтибар менән ҡарап барған һунарсы бар бөжәктәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырырға тырышманы. Тәҡәт бирмәй, күҙ астырмай баҫҡан себен-серәкәйгә артыҡ иғтибар бирмәй яйлап алға бара бирҙе. Бер аҙ тора биргәс, һоҡланыуын йәшерә алмай йылмайып ебәрҙе. Һай, Хоҙайҙың ҡөҙрәте, ниндәй генә үҫемлек юҡ яланда, ниндәй генә бөжәк юҡ унда. Бай ҙа икән үҙебеҙҙең тәбиғәт. Ана, ҡара әле, яҡындағы күҙҙең яуын алырлыҡ ҡыҙыл сәскәнән йәшел төҫөн ҡояш нурҙарында уйнатып апаруҡ ҙур ҡуңыҙ осоп китте. Ә бынауһы һуң, бынауһы. Ҡалай матур күбәләк. Бына, күр, мин ниндәй гүзәл, тигәндәй, ҡанаттарын кинәт-кинәт елпеп алды ла ҡапыл күтәрелеп күҙ алдынан юғалды ҡуйҙы. Мин дә матур, башҡаларҙан бер ерем дә ҡайтыш түгел, тигәндәй, эргәләге сәскәлә тегеләй-былай иңкеш йүгергеләп алды. Һүҙ ҙә юҡ, ул да бигерәк матур. Әммә ул оҙаҡлап торманы. Сәскә тажын бер-ике әйләнеп сыҡты ла, миңә бер нәмә лә ҡалдырмағандар, тигәндәй, нисек килде, шулай осоп та китте. Ә бына һағыҙаҡ бөтөнләй ултырып торманы. Ҡайҙандыр геүелдәп осоп килеп сыҡты, был тирәлә өйөрөлөп осоп йөрөгән булды, унан осоуын дауам итеп ҡуйы урман араһына инеп юҡ та булды. Ә бына ҡырмыҫҡалар яйлап ҡына эшләп тик йөрөйҙәр. Ҡайһылары үләнгә менеп бара, ҡайһылары төшөп бара. Шул ваҡыт һунарсы ҡолағына таныш геүелдәү салынып ҡалғандай булды. Шулай шул, бына таныш безелдәк үҙе лә килеп ҡунды сәскәгә. Бер-ике сәскәгә ҡунып эшләй бирҙе лә ҡапыл күтәрелеп осоп, яйлап күҙҙән юғалды. Һунарсы устарын ҡаш өҫтөнә ҡуйып күпме текләп торһа ла уның ҡайҙа осҡанын билдәләй алманы. Кискә тиклем апаруҡ ҡына бал ҡорттары осрай торҙо, әммә һөҙөмтә булманы. Ахырҙа ҡул һелтәп ҡуйҙы. Былай билдәләп булмай, бөгөнгә етәр.

Уя буйынан сөбөрләп кенә аҡҡан шишмә буйында ял итергә ҡарар итте һунарсы. Һыу алырға төшкәйне, айыу эҙенә тура килде. Урман хужаһы яңыраҡ ҡына һыу эсеп киткәнгә оҡшай, шишмәситендәге ҡойола эҙе ап-асыҡ ярылып ята, тип уйлап китеп барған еренән ҡапыл... туҡтап ҡатып ҡалды. Ысынлап та, ул бит айыуҙы бөтөнләй күҙ уңынан ысҡындырып ебәргән дәбаһа! Урман хужаһы бал ярата, тимәк, ул кешегә ярҙам итә ала ла түгелме? Бал ҡорто йәшәгән ағасҡа айыу үрмәләп менә. Тимәк, ағас олононда уның тырнаҡ эҙҙәре мотлаҡ ҡала! Шулай булғас, уның тырнаҡ эҙҙәре буйлап тайыш табан менеп төшкән ағастарҙы табыр кәрәк! Бындай асыштан һуң һунарсы күңелендә өмөт осҡондары балҡып китте.



Ә шулай ҙа икенсе көндөң кисенә табан ғына таба алды ул ҡорт ояһын. Күпме ара үтте, нисәмә ағасҡа менеп төштө, быны һунарсы үҙе генә белә. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп ҡайтып китерҙәй сағы ла булды. Әммә һүнмәгән өмөт уны һаман алға әйҙәне. Ҡәбилә башлығының ялбарыулы ҡарашы хатта көс өҫтәгәндәй ҙә булды шикелле. Ә шулай ҙа тапты һунарсы безелдәктәр ояһын! Ҡул һелтәрҙәй хәлгә етеп ялбыр ҡарағайға менгәс, мөғжизә, айыу туҙҙырып киткән ояға юлыҡты! Әммә һунарсы шундай арығайны, хатта ҡыуанырлыҡ та хәле ҡалманы. Шулай ҙа, булды булай булғас, тип тамаҡ ҡырып алған булды. Әйтерһең, ҡәҙимге көндәлек эш башҡарҙы. Бер аҙ тын алғас, балтаһы менән айыу соҡоған тишекте яйлап ҙурайта башланы. Шул саҡ һунарсы ҡәнәғәтләнеп йылмайып ебәрҙе. Ҡулдарын өҫкә күтәреп, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәрен еткерҙе. Тыуасаҡ сабыйҙың бәхете бар икән - безелдәктәр ташлап киткән ҡарағай ҡыуышлығында ҡорт балы етерлек ҡалғайны!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы. Башы 7-8-се**
**һандарҙа).**

---

Инсульттың башҡа күҙгә ташланған төп симптомдарын иҫтә ҡалдырыу ҙа ҡыйын түгел. Биттең, айырыуса бер яҡ ҡулдың йәки аяҡтың ҡапыл ғына ойоуы йәки хәлһеҙләнеүе, көтмәгәндә артикуляция боҙолоуы, һөйләгәнде аңламай башлау, бер йәки ике күҙҙең дә ҡапыл ғына насар күрә башлауы, күҙ алды ҡараңғыланыуы, баш әйләнеүе, кешенең йөрөгәндә сайҡалыуы, хәрәкәттәрҙең координацияһы боҙолоуы, баштың ҡапыл һәм ныҡ ауырта башлауы, ҡоҫоу, температураның күтәрелеүе тап инсульт хаҡында хәбәр итә лә инде. Шулай уҡ инсульттың киҫкен симтомы булып ауырыуҙың иҫен юғалтыуы тора.

Баш мейеһенең бәләкәй өлөшө имгәнеүе арҡаһында, был микроинсульт булараҡ билдәле, ауырыуҙы һиҙмәй үткәреп ебәрергә лә мөмкин. Ләкин был, ауырыу үтте, тигән һүҙ түгел, тейешле саралар күрелмәһә, киләсәктә инсульттың көслөрәге аяҡтан йығыуы бар. Шулай уҡ микроинсульт кешенең психикаһына тәьҫир итмәй ҡалмай. Уның эмоциональ тотороҡһоҙлоғо, асыуланыу, ҡыҙыулығы артыуы мөмкин. Ярһыулығы ҡапыл күңел төшөнкөлөгө, һүлпәнлек, дәртһеҙлек менән алмашыныуы күҙәтелә, ул сәбәпһеҙгә илаусанға әйләнә. Шулай уҡ микроинсульт хәтерҙең юғалыуына ла килтерә.

Үҙегеҙҙең һәм туғандарығыҙҙың хәл торошона иғтибар менән ҡарап, инсульттың һеҙгә янау йәки янамауын асыҡларға мөмкин. Әгәр ҙә һеҙҙең бер йәки бернисә туғанығыҙ инсульт кисерһә, һеҙ ҡан баҫымының күтәрелеүе, йөрәк өйәнәге, шәкәр диабеты ауырыуынан сирләһәгеҙ, алкоголь эсемлектәр ҡулланһағыҙ, тәмәке тартһағыҙ, кәүҙә ауырлығығыҙ саманан тыш артыҡ булһа, инсульт кисереү ихтималлығы ла күпкә арта.

Ауырыуҙы дауалағанға ҡарағанда уны иҫкәртеү күпкә яҡшыраҡ икәнлеген әйтеп торорға кәрәкмәйҙер. Инсультты профилактикалауҙа төп сара - сәләмәт тормош алып барыу, дөрөҫ туҡланыу. Ҡан баҫымын яйға һалыу, ҡан тамырҙарын таҙартыу, нервыларҙы тынысландырыу, организмдың һаҡланыу көсөн арттырыу, аш һеңдереүҙе яҡшыртыу, йоҡоно һәйбәтләү был мәкерле ауырыуҙы киҫәтеүҙә көслө роль уйнай. Әгәр ҙә һеҙ үҙегеҙҙә иҫ һәм күреү һәләтенең кәмеүен, ҡолаҡта шау-шыу һиҙһәгеҙ, баш ауырыуы һәм әйләнеүе йышайһа, ҡыҫҡа ваҡытҡа иҫ юғалтыу кеүек симптомдар барлыҡҡа килһә, күрһәгеҙ һис кисекмәҫтән врачҡа мөрәжәғәт итеү мөһим. Инсульт - невропатолог, реаниматор, ҡайһы саҡта нейрохирургтың дауалаулауын талап иткән ауырыу. Ауырыуҙы ни тиклем врачтар ҡулына тиҙерәк барып эләгә, һауығыуҙың һөҙөмтәһе лә шул ҡәҙәр көслөрәк була.

**Бер ауырыу ҙа юҡтан барлыҡҡа килмәй. Донъяла матур, тулы ҡанлы тормош менән йәшәүебеҙ бары тик үҙебеҙҙең ҡулда. Бер ниндәй ауырлығы булмаған профилактика сараларын ҡулланып, үҙ һаулығыбыҙ өсөн үҙебеҙ яуаплы икәнлеген хәтерҙән сығармай йәшәһәк, инсульт та, башҡа ауырыуҙар ҙа беҙҙең һәм яҡындарыбыҙҙың ишеген ҡаҡмаҫ.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тойғоларығыҙҙа аҙашмағыҙ

Эмоциялар бик мөһим. Улар беҙҙең тәртибебеҙ, үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙ менән идара итеүсе батареялар. Уларһыҙ беҙ көсһөҙ, ә улар ярҙамында нимәлер эшләргә һәләтебеҙ асыла.

Мин һеҙҙе эмоцияларҙан арындырырға тырышмайым. Был ахмаҡлыҡ булыр ине. Әммә һеҙ үҙегеҙгә барлыҡ байлыҡтарҙан ҡиммәт булған ысул менән ярҙам итә алаһығыҙ. Һүҙ Аллаһҡа яҡын асылышлы кеше булырға ҡамасаулаған деструктив эмоцияларҙы көйләү тураһында бара. Деструктив эмоциялар элекке тәжрибә һөҙөмтәһендә тыуған йәки әлеге ваҡыттағы низағтар һөҙөмтәһе булырға мөмкин.Ошоно асыҡлау өсөн бер нисә һорауға яуап биреү зарур:

**Иртә бала саҡ:** Һеҙ ғаиләлә берҙән-бер бала инегеҙме? Һеҙгә яза биргәндә физик көс ҡулландылармы? Нимә менәндер ҡурҡыттылармы?

Ата-әсәйегеҙ һеҙҙе иркәләттеме? Һеҙ үҙегеҙҙе теләп алынмаған бала тип хис иттегеҙме?

**Үҫмер саҡ:** Бала саҡтағы кеүек йыш яза бирҙеләрме? Теләгән нәмәгеҙҙе алыр өсөн ауырыған булып ҡыланырға тура килдеме? Ата-әсәйегеҙ йыш талаштымы? Ата-әсәйегеҙ һеҙгә йыш ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙеме? Ғаиләләге мөхит күңелһеҙ булдымы?

**Хәҙерге ваҡыт:** Һеҙҙең һәм дуҫығыҙ араһында ҡырҡа айырма бармы? Балаларығыҙ борсолоу тыуҙырамы? Никахығыҙға янаған өсөнсө кемдер бармы? Икенсе яртығыҙҙа һеҙҙе сығырығыҙҙан сығарған физик етешһеҙлектәр бармы? Ғаилә ағзағыҙҙан кемдер вафат булдымы?

Джордж бәхетле булырға теләй, әммә уға бер-бер артлы проблемалар өҫтәлә, шул сәбәпле ул һәр саҡ күңеле төшөп йөрөй. Унда, бәхет минең өсөн түгел, тигән фекер нығына. Шул саҡта иғтибарын аңды күнектереүҙең дүрт көнлөк курстары йәлеп итә. Күнекмә барышында ул үҙен бәхетһеҙ итеп тоя һәм хәленең яҡшырырына әллә ни иғтибар итмәй. Әммә икенсе көндөң яртыһында ул үҙенең күпкә алға киткәнен тойоп ҡыуана. Ул башҡалар менән уртаҡ тел таба башлай. Өсөнсө көн һуңында ул үҙенең эмоциялары яҡшы яҡҡа үҙгәреүен аңлай. Уның тиҙерәк сираттағы этапҡа күскеһе килә башлай. Ә курстар тамамланғас, ул үҙен һауала осоп йөрөгән кеүек тоя. "Мин үҙемдең кем икәнлегемде аңланым, - ти ул. - Мин - ниндәйҙер ҙур нәмәнең мөһим өлөшө".

Һеҙ ҙә үҙегеҙ уйлағандан күпкә ҙурыраҡ һәм мөһимерәк әһәмиәткә эйә. Шуға күрә тәү сиратта проблеманы табығыҙ, ныҡлап уйлап, уны нисек хәл итеү юлын да табасаҡһығыҙ.

Хәҙер һеҙгә уйығыҙҙа ғына тағы бер бүлмә кәрәк буласаҡ. Уны таҙартыу талап ителмәй, сөнки ул һәр ваҡыт таҙа һәм тәртиптә. Уға уйығыҙҙа ингәндә лә һеҙ деструктивлыҡты ҡыуып, уны ижади һәләткә алмаштыра алаһығыҙ. Эмоцияларығыҙға көс һәм ижади энергия өҫтәү өсөн яҡшылап ултырығыҙ, тәрән итеп бер нисә тапҡыр тын алығыҙ һәм тыныс картина һүрәтләгеҙ. Һуңынан инде үрҙә яҙылған бүлмәне төҙөгөҙ. Ғәҙәттәгесә, "Мин үҙ аңымда" тип, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

- Яҡшылап ултырығыҙ, бүлмәне яҡтыртығыҙ.
- Яҡтылыҡ сығанағы менән хозурланығыҙ, үҙегеҙҙе ошо яҡтылыҡтың бер өлөшө тип тойоғоҙ, барыһы ла яҡшы булғанына инанығыҙ.
- Үҙ алдығыҙға ғына: "Мин үткәндәрҙең кире йоғонтоһонан арындым һәм бөтөн нәмәгә ыңғай ҡараштамын", тип күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Был бүлмә һеҙҙең өйөгөҙҙө йәки фатирығыҙҙы тулыландырып торасаҡ. Ул яҡты төҫтәрҙә һәм нур сығанағы буласаҡ. Был яҡтылыҡ һөйөү илтәсәк. Ул ни тиклем яҡтыраҡ, һөйөүегеҙ шул тиклем артасаҡ. Ул һеҙгә сикле кеше булыуҙан арыныуҙа ярҙам итәсәк.

**Роберт СТОУН.**

ДОНЪЯ ХӘЛДӘРЕ

# ТУНИСТА - "ФИНИК РЕВОЛЮЦИЯҺЫ",

## ә Ливияла...

**Ливияла барған ваҡиғалар бар донъя йәмәғәтселегенең иғтибар үҙәгендә бөгөн. Декабрь айында Яҡын Көнсығыш илдәрендә башланған сыуалыштар теҙеп ҡуйылған домино тарҡалышын хәтерләтте: ул бер ғәрәп иленән икенсеһенә йәшен тиҙлегендә күсеп, барлыҡ илдәрҙе тиерлек баҫып алды. Туниста - "финик революцияһы", Мысырҙа - "пирамидалар революцияһы", Йәмендә - "ас революция". Был ваҡиғалар бер кемде лә битараф ҡалдырмай.**



Һуңғы аҙналар ваҡиғаһы Ливия менән бәйле. Дөрөҫөрәге, 1969 йылда власка килгән Муаммара Каддафиҙың артабанғы яҙмышы тураһында һүҙ бара. Власка килгәс тә Ливияла "халыҡ джамахирияһы" тип аталған дәүләт төҙөгән Каддафи бөтә донъя сәйәсәтендә иң сәйер сәйәсмәндәрҙең береһе булараҡ билдәле. Ул власты ҡулына алғас та барлыҡ исемдәрҙән баш тартып, үҙен "Революция лидеры" тип йөрөтә башлай. Ләкин үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнарға теләмәй, үҙенә донъялағы барлыҡ революцион хәрәкәттең яҡлаусыһы бурысын ала. Ливия территорияһында күп төрлө террористик лагерҙар барлыҡҡа килә. Каддафи башҡа илдәрҙә барған болаларҙы хуплап ҡаршы ала. Берҙәм Ғәрәп республикаһы төҙөү хаҡында хыяллана. 1980 йылдарҙа Каддафи менән Көнбайыш илдәре араһында мөнәсәбәттәр бөтөнләй боҙола. Америка Ҡушма Штаттары һәм Бөйөк Британия Ливия менән менән барлыҡ дипломатик бәйләнештәрен өҙә. Тик үткән быуат аҙағында ғына бәйләнештәр яйға һалынып, Каддафиҙы күп илдәрҙең баш ҡалаларында ҡабул итһәләр, Триполдең үҙенә Көнбайыш сәйәсмәндәренең юлы йышая. Бөгөнгө ваҡиғаларҙың артабанғы үҫешен аныҡ ҡына әйтеп булмай. Ҡайһы бер эксперттар күҙаллауынса, Каддафи власы ҡолаясаҡ, ә ил үҙе өс өлөшкә: көнбайышта - Триполитания, көнсығышта - Киренаику һәм көньякта Феззанға бүленәсәк. Бөгөнгө көндә Ливия территорияһының күпселек өлөшөн үҙ контроленән ысҡындырған Каддафи властан китмәйәсәген, халҡы уны яратыуын һәм уның өсөн үлергә әҙер булыуын белдереп сығыш яһай. Ләкин нисек кенә булмаһын, Муаммара Каддафиҙың 40 йылдан ашыуға һуҙылған власы ныҡлы ҡаҡшау кисерә.

Сыуалыштар барған барлыҡ илдәрҙә лә халыҡты баш күтәрергә мәжбүр иткән проблемалар оҡшаш. Оҙаҡ йылдар власть башында торған президент хөкүмәте менән ризаһыҙлыҡ, халыҡтың ауыр тормошо, йәштәрҙең киләсәккә өмөтө булмауы, эшһеҙлек, шулай уҡ сәйәси һәм иҡтисади яҡтан Америка Ҡушма Штаттарынан көслө бойондороҡһоҙлоҡ революцияларға килтерҙе, тип фаразлай белгестәр. Бер революция ла ҡапыл ҡалҡып сыҡмай. Йылдар буйы күңелдәрҙә быҫҡыған ризаһыҙлыҡ осҡоны янып китһен өсөн бәләкәй генә ҡуҙ ҙа етә. Мәҫәлән, Туниста халыҡ сыуалыштарын Сиди-Бузид ҡалаһында урамда емеш-еләк менән һатыу итеүсенең үҙ-үҙен яндырыуы башлап ебәрә. Тауары власть тарафынан тартып алынған һатыусы илдә барған законһыҙлыҡҡа сыҙамай, ошо юлға бара. Күпләгән халыҡ ҡатнашҡан бәрелештәрҙән ҡурҡып, президент Бе-Али ғинуар айында илдән ҡаса.

Туниста тиклем үк Алжирҙа башланған протест акциялары азыҡ-түлеккә хаҡтарҙың ҡапыл артыуы, йәштәр араһындағы эшһеҙлеккә бәйле булғайны. Президент Абдель Азиз Бутефликтың халыҡ талабы буйынса илдә егерме йылға һуҙылған ғәҙәттән тыш хәл режимын бөтөрөүе һәм икенсе президент һайлауҙарында үҙенең кандидатураһын ҡуймаясағын вәғәҙә итеүе халыҡтың ризаһыҙлығын һүрелдерә, ләкин бөтөнләй һүндермәй.

Башҡа илдәрҙә лә ошоға оҡшаш хәлдәр. Геополитик проблемалар Академияһы Президенты Леонид Ивашов белдереүенсә, халыҡ ихтилалдары ҡупҡан илдәр АҠШ-тан сәйәси һәм иҡтисади яҡтан бойондороҡло илдәр. Ғәрәп донъяһы Көнбайыш илдәрен осһоҙ хаҡҡа нефть һәм тәбиғи газ менән тәьмин итеү төбәгенә әйләнде. Арзан экспорттан ғәрәп илдәренең үҙҙәренә тамсы ғына тама. Күп йылдар шым булған халыҡ бөгөн килеп үҙ һүҙен әйтте.

Ливия, мәҫәлән, Ираҡтан ҡала, Европа илдәренә, нефть сығарыусы төп илдәрҙең береһе. Революция башланғандан алып күп кенә нефть ятҡылыҡтары Каддафи ҡулынан ысҡынған тип әйтергә була. Американың Ираҡ нефтен үҙ ҡулына ҡармауын Евросоюз "йотоп ебәрҙе". Һәм АҠШ-тың Ливияла барған сыуалыштарҙан файҙаланып, был илдәге нефтҡә лә күҙ һалыуы мөмкин. Ливияла барған сыуалыштарға ҡарата АҠШ-тың сәйәси белдереүҙәре һәм сығыштарынан уның был ғәрәп илен контролдә тоторға тырышыуы аңлашыла. АҠШ-тың Дәүләт секретаре Хиллари Клинтон менән Бөйөк Британия премьеры Дэвид Кэмерондың Каддафи режимына ҡаршы ҡорал ҡулланыу мөмкинлеген күҙҙән ысҡындырмауы күпте һөйләй. Бөгөнгө көндә Ливия ярҙарында торған Америка караптары, бары тик ҡасаҡтарға ярҙам итеү маҡсатынан ғына килтерелде, тип белдерә, Америка донъя йәмәғәтселеген тынысландырырға тырыша. Шулай уҡ был илдәр Ливия һауа киңлеген ябыу кәрәк тип тәҡдим итә, был йәнәһе лә Каддафиға "һауанан үҙ халҡын ҡырырға" бирмәйәсәк. Ошондай һорау тыуа: ни өсөн АҠШ Берләшкән Милләттәр ойошмаһының Хәүефһеҙлек Советын, Ғәрәп илдәре лигаһын үтеп сығып, Ливияға үҙ ғәскәрҙәрен индереү-индермәүҙе бер үҙе хәл итә? Үҙ сиратында, Франция президенты Николя Саркози ла Евросоюз етәкселәренә Муаммара Каддафи базалары урынлашҡан урындарҙы һауанан утҡа тоторға тәҡдим итте. Әйтеп үтергә кәрәк, бөгөнгө көнгә Франция Ливия баш күтәреүселәре ойоштороған Ливияның милли советын был илдәге берҙәнбер законлы власть итеп ҡабул итеүен белдергән беренсе ил. Рәсәй, Ҡытай, Сәғүд Ғәрәбстаны илдәре Ливиялағы хәлгә хәрби ҡыҫылыуҙар булмаҫҡа тейеш, тигән позицияны һаҡлай. Американың Ливияға үҙ ғәскәрҙәрен индереүе Каддафи яҡлыларҙан да, оппозициянан да, интервенттар ягынан да күп ҡорбандарға килтереүе мөмкин. Илдең айырым өлөштәрен генә утҡа тотоп, илдә тағы ла көслөрәк тулҡындар барлыҡҡа килтерергә була. Ә был, үҙ сиратында, Америкаға тыныслыҡ урынлаштырабыҙ тигән һылтау менән үҙ ғәскәрен Ливияға индереп, унда нығыныу өсөн ҡулай буласаҡ.

Каддафи НАТО йәки АҠШ ғәскәрҙәре илгә баҫып ингән хәлдә Ливия "икенсе Вьетнамға" әйләнәсәк тип белдерҙе. Үҙ сиратында НАТО-ның генераль секретаре Андерс Фог Расмуссен Ливиялағы ваҡиғаларға альянстың әлегә ҡыҫылмаясағын, ләкин тыныслыҡты һаҡлау ойошмаһы булараҡ, ваҡиғаларҙың нindәй йүнәлеш алыуына ҡарамаҫтан, әҙер тороуҙарын йәшермәне.

Ливиялағы бәрелештәр арҡаһында, халыҡ-ара ойошмалар белдереүенсә, алты меңдән ашыу кеше һәләк булған. Һәм ҡорбандарҙың күп өлөшө Муаммари Каддафиҙың оппозиционерҙарҙы ҡырыуы арҡаһында, тип еткерә донъя матбуғат саралары. Муаммара Каддафи, быны менән риза түгел һәм Берләшкән йәмғиәттәр ойошмаһына Ливияла барған хәл-ваҡиғаларҙы тикшереү өсөн комиссия ебәреүҙе һорай. Бәрелештәр башланғандан алып Тунис сиге аша - етмеш меңдән һәм Египет сигенән да етмеш меңдән ашыу кеше Ливиянан сығарылған, ләкин бөгөнгө көндә лә сиктә меңәрләгән кеше лагерҙарҙа йәшәй. Барлыҡ илдәр ҙә Ливиянан үҙ граждандарын ашығыс рәүештә эвакуациялай. 27 февралдә Берләшкән Милләттәр ойошмаһы Хәүефһеҙлек Советының Муаммари Каддафи һәм уның яҡындарына ҡарата финанс һәм виза санкциялары ҡулланыу хаҡындағы указ үҙ көсөнә инде. Был указға ярашлы Каддафи һәм уның яҡындарына илдән сығыу тыйыла, уларҙың сит илдәге банк иҫәптәре "туңдырылды", шулай уҡ Ливия менән ҡорал сауҙаһына эмбарго (сит илдән индереүҙе йәки сығарыуҙы тыйыу) индерелде. Рәсәй президенты Дмитрий Медведев та Ливияға ҡорал һатыуҙы туктатыу хаҡындағы указға ҡул ҡуйҙы.

Ливияла ғына түгел, ә сыуалыштар булған барлыҡ илдәрҙәге ваҡиғалар бөтә донъя иҡтисадына һәм хәл-торошона йоғонто яһамай ҡалмаясаҡ. Ваҡиғалар нindәй боролош алһа ла, нindәй юҡһыта тамамланһа ла, уның ауазы әле оҙаҡ ишетелеп торасағына шик юҡ.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

ИШАРА

# "ТАЙМАҪ" ҺЫУЫ

## Архангелдә лә сыға икән

**Ике йыл элек кәләшем менән "Исмәғил" компанияһы етештергән "Таймаҫ" һыуын эсеп ҡарарға булып, телефон аша заказ бирҙек. Компания вәкиле 18,9-ар литрлы ике пластик һауыт менән беҙгә һыу ҡалдырып китте. Рәхәтләнеп эстек, шифаһын татыныҡ.**

Тик ике-өс ай самаһы ғына рәхәтләнеп эсеп ҡалдыҡ был һыуҙы. Бер саҡ килеп һыуҙың тәме ҡапыл үҙгәрҙе, унан крандан аҡҡанға ҡарағанда ла тәмһеҙерәк, татыр, тут еҫе килә башланы. Баш тартырға тура килде. Шулай ҙа, электән таныш булғас, бер осрашҡанда "Исмәғил" компанияһы етәксеһенә дәғүәләремде белдерҙем барыбер.

-Аңлашылды, мырҙа, тыуған ауылым Таймаҫ янынан алынған беҙҙең "Таймаҫ" һыуы Рәсәйҙә Арктикала һәм Байкалда сығарылған һыуҙар кеүек юғары баһалана. 2010 йылда Ҡаҙанда үткән Рәсәй форумында беҙҙең һыу 1-се урынды яуланы."Таймаҫ"тың яулаған даны уны рекламалау өсөн дә яҡшы хеҙмәт итә. Шуға күрә лә Өфөлә беҙҙең фирма ярлығын урлап, һауыттарға кран һыуы тултырып, уларҙы "Таймаҫ" һыуы тип һатыусы бик күп ялған фирмалар барлыҡҡа килде. Ҡайһы берҙәрен беҙ эләктерҙек, судҡа бирҙек. Һеҙ, үҙегеҙ ҙә белмәҫтән, ана шуларҙың тоҙағына эләкkәнһегеҙ, - тине компания етәксеһе Сәғит Исмәғилев.

Иҫкә килеп төштө. Ысынлап та, мин ул саҡта оҙайлы командировкаға китеп, һауыттар бушап ҡалғас, кәләш урамда "Таймаҫ" һыуы тип яҙылған реклама плакатынан телефон номерын алып шылтыратып һыу килтерткәйне. Быға был эш менән үҙем шөғөлләнеп, телефон номерҙары ла үҙемдә генә ине. Беҙ ысын "Исмәғил" компанияһының "Таймаҫ" һыуы менән ялғанын тап шул саҡта алыштырғанбыҙ. Быны бит нисек килеп сыҡҡан. Ялған компания ошо юл менән "Исмәғил"дең клиенттарын урлай икән. Йәғни компанияның ҙур тырышлыҡ менән донъя кимәлендә яулаған брендын файҙалана. Тарих ҡабатлана: "Башҡорт балы" менән дә шундай уҡ хәл булғайны. Хәҙер "Башҡорт балы" исеме аҫтында кем генә, ҡайҙа ғына, нindәй генә бал менән һатыу итмәй.

Белгестәр эсәр һыуҙың йылдан-йыл ҡытлыҡҡа әүерелә барыуын билдәләй. Тимәк, иртәме-һуңмы, Башҡортостандың күп һандағы шишмә-сығанаҡтары һыу менән һатыу итеү урындарына әүереләсәк һәм ул осраҡта ла донъя кимәлендә беҙҙең һыу брендын файҙаланып һатыу итеүсе ялған фирмалар күбәйәсәк. Бынан бер нисә йыл элек һыуҙың да шундай тауарға әүерелеүен күҙ алдына ла килтерә алмай инек әле.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әле яңыраҡ "Исмәғил" компанияһы "Таймаҫ" һыуы брендын файҙаланып һатыу итеүсе тағы ла бер "Таймаҫ - Тәбиғәт һеҙҙең хаҡта хәстәрлек күрә" фирмаһын фашлауҙары хаҡында хәбәр итте. Был шәхси предприятие Архангель районының Яңы Һарт ауылы янындағы скважинанан алынған һыуҙы "Таймаҫ" һыуы тип һатып ята икән.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

# ЭСКЕЛЕК СИР ТҮГЕЛ,

## унан табип ҡына арындыра алмай

**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте бик изге, бик маҡсатлы, әммә бик ауыр эш башлаған. Ниәттәре тормошҡа аша күрһен инде, иншаллаһ. Беҙ, үткән быуат вәкилдәре, диндән ныҡ ҡына алыҫайған кешеләр. Мосолмандар тип аталһаҡ та беҙ дингә яңы йөҙ борабыҙ. Шулай ҙа, иншаллаһ, һөҙөмтәләр күренә. Эсмәгән йәштәр күҙгә күренеп артты. Элек һәр ҡунаҡ мәжлесен, байрамдарҙы, хатта һуғым аштарын эскеһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмаһаҡ, бөгөн ауылдарҙа эскеһеҙ мәжлес үткәреүселәр ҙә арта бара.**

Беҙгә, торғонлоҡ осоро вәкилдәренең күпселек өлөшөнә, хәҙерге йәштәргә аҡыл өйрәтеүе лә ауыр, сөнки беҙҙең аңыбыҙ, аҡылыбыҙ замана шауҡымдары менән томаланған. Беҙ ул шауҡымдарҙы ысынбарлыҡ тип ҡабул иткәнбеҙ, ә аң үҙләштергәнде кирегә үҙгәртеү күп ваҡыт талап итә. Беҙ хәҙерге матур, айыҡ йәштәргә ҡарайбыҙ ҙа, эскелек араһында әрәм үткән йәшлегебеҙ өсөн үкенәбеҙ. Тормошобоҙҙоң матур яҡтары, ҡаҙаныштарыбыҙ, уңыштарыбыҙ ҙа сикһеҙ ине, әммә улар "йәшел йылан" арҡаһында үҙ ҡимммәттәрен юғалтты, тоноҡланды, төсһөҙләнде. Гүзәл заттың күпләп эскегә тартылыуы ла беҙҙең быуынға тура килә. Башыңа ҡайғы төшөп, аңҡы-тинке булып йөрөгәндә, "ҡайғы уртаҡлашып", һинең ҡулдарыңа мөлдөрәмә тулы рюмка тотторалар ине. "Йыуҙырыуҙарҙың" да иҫәбе-һаны булманы. Бала мәктәп эскәмйәһенән китте ниһә, әйтерһең дә, ата-әсәгә тиңләр - күптәре балалары менән сәкәштерә башлай, балаһының күңел асырға яратыуына ла күҙ йомоп ҡарай. Бала әхлаҡи ҡанундарҙы, зиһен нигеҙен, тормошҡа әҙерлекте асылда ғаиләлә ала. Уның күңеленә ихтирам орлоғо нигеҙҙә ғаиләлә һалына, мәктәптә нығытыла. Халҡымдың тапҡыр мәҡәлдәре лә шуға ишара: "Әсәһенә ҡара ла ҡыҙын ҡос", "Алма ағасынан алыҫ төшмәй", "Сәскәнеңдә ни сәсһәң, урғанында шул булыр", "Әсәһенә ҡарап ҡыҙы тун бесер, атаһына ҡарап улы уҡ юныр".

Бөгөн илдә аҙғынлыҡ, эскелек көсәйгән мәлдә беренсе сиратта тәрбиәне үҙендән, ғаиләнән, ауылындан башлау зарурҙыр. Был йүнәлештә бик ныҡ эшләргә кәрәк. Ысынлап та, Фәнзил Әхмәтшин әйтмешләй, ҡәтғи булырға, араҡыға дошманға ҡарағандай ҡарарға кәрәк. Юғиһә бит эскенән бөтөнләй ваз кискәс тә һине мәжлестә үҙ итмәй башлайҙар. "Нимә, әллә мулла булдыңмы? Беҙҙе кешегә һанамайһыңмы, беҙ ҙә эскесе түгел", тигән кеүегерәк һүҙҙәр ташлайҙар. Быңа шунда күренә лә инде кешенең ихтыяр көсә. Ҡаршы тора алһаң, 3-сө, 4-се мәжлестәрҙә һинә тәҡдим итеүселәр булмаясаҡ. Артабан һинең янында эсмәҫкә теләүселәр арта, һинән бер аҙ булһа ла унайһыҙланыусылар күбәйә, өҫтәлдә шешәләр һаны кәмей, йә бөтөнләй бөтә.

Алкоголизм ул сир генә түгел. Кеше үҙе менән үҙе көрәшмәһә, уны кешеләрҙең өгөтө, төрлө дауалау ысулдары ғына эскенән арындыра алмаясаҡ. Тик... Беҙ башҡорттар бит әле. Юғалып ҡалырға тейеш түгелбеҙ. Беҙ айыҡлыҡ яҡлы.

**Зарифа АБЫҘБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республикала иғлан ителгән "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға теләк белдереүселәр: Белорет районынан - Мөхәммәт, Ғафури районынан - Сәйетбаба, Хәйбулла районынан Йәнтеш ауылдары ғына ғариза бирһә, бөгөнгә уларға тағы ла алты ауыл ҡушылды: Йәрмәкәй районының Ҡолбай, Күпсәнәй, Рәтамаҡ, Спартак ауылдары, шул уҡ Әбйәлил районының Ҡырҙас һәм Әхмәт ауылдары, Учалы районының Һөләймән ауылы. Ғаризалар биреү 1 апрелгә тиклем дауам итә. Ә "Киске Өфө" гәзите "Айыҡ туй сценарийы"-на конкурс иғлан итте. Конкурсҡа ҡатнаша алырҙай сценарийҙар гәзитебеҙ биттәрендә баҫыласаҡ. Ә иң яҡшы авторҙар иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ буласаҡ.**

АТЫҢ КЕМ?

# ХАЛЫҠ УЛДАРЫ БУЛЫРБЫҘ!



Әлшәй районы Ҡармыш ауылында йәшәүсе Флярид менән Әминә Ризвановтар ғаиләһендә халҡыбыҙҙың оло мәғәнәгә эйә, матур исемен йөрөткән **Динислам** исемле батыр егет үҫеп килә. Әле уға бер генә йәш. Һуңғы йылдарҙа башҡорт исемен йөрөткән балаларҙың артыуын күреп, Ризвановтар ҙа улдарына матур яңғырашлы башҡорт исемен ҡушырға теләй. Оҙаҡ уйлап, халҡыбыҙҙың барлыҡ исемдәрен барлап сыҡҡандан һуң, олатаһы тәҡдиме менән малайға Динислам тип исем ҡушалар. Атаһы яғынан олатаһы бик иманлы, дини ғилемле, абруйлы, тәҡүәле кеше була. Ейәненең дә уның юлын ҡыуып, зирәк аҡыллы, ғилемле, иманлы булыуын теләй ата-әсә. Малайҙың зирәклеге, сослоғо, тапҡырлығы әле үк һиҙелә, күҙ генә теймәһен! Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа был исем Башҡортостан ауылдарында киң таралды. Улдарының ошо бөйөк исемде йөрөтөүенә үҙҙәре лә ҡыуанып, ғорурланып бөтә алмай ата-әсә.



**Нуриман Әхмәҙиев** - Учалы ҡалаһы егете. Был матур исемде уға атаһы менән әсәһе һайлаған. Атаһына алмашсы булып үҫеп килгән егетебеҙ хәҙер инде дүрт йәшен тултырҙы. Үҙенә күрә һөнәрҙәре лә байтаҡ: бер туған Лилиана апаһы менән шиғырҙар, йырҙар, бейеүҙәр өйрәнәләр, һүрәт төшөрәләр. Шулай уҡ атаһына ҡаҙаҡ ҡағышҡаны ла, әсәһенә ҡамыр баҫышҡаны ла бар. Ә уйынсыҡтарын бер үҙе лә йыйыштыра ала. Киләсәктә ҙур ярҙамсы сығыр әле үҙенән! "Исеменә күрә есеме, тиҙәр бит. Малайыбыҙ ҙа исеменә тап төшөрмәһен, иманы йөҙөн нурландырып, йөрәген пакландырып торһон, тәрбиәле, тәүфиҡлы бала булһын, тип теләйбеҙ. Динебеҙ буйынса ла балаға матур мәғәнәле исем ҡушырға кәрәк, тиелә. Шәжәрәләргә күҙ һалһаҡ, олатайоләсәйҙәребеҙҙең исемдәре ни тиклем матур һәм мәғәнәле икәнен күрәбеҙ. Ул исемдәрҙең күбеһе хәҙер юғалып та бара. Ата-бабаларыбыҙ балаға исем һайлағанда бик иғтибарлы булған, беҙ ҙә ошо йоланы дөрөҫ үтәргә, балаларыбыҙға матур исемдәр ҡушырға тейешбеҙ," - ти Нуримандың ата-әсәһе.

**Нәзирә АЙЫТОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЙЫРЫЛМАҪ ДУҪЫҢА...

## ҡайырылмаҫ һүҙ әйтмә

Ҡәмәрҙең һимммәте - ҡашында, ирҙең ҡиммәте - башында.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Нимә отошло: ситтәрҙең етешһеҙлектәренә күҙ йомоумы, әллә һинең етешһеҙлектәреңә ситтәрҙең күҙен йомоуымы?

**(А. Бабель).**

Шайтан үҙенә ҡорбан әҙләп донъя ҡыҙырмай, уның ҡабул итеү бүлмәһендә ҡорбандар сират тора.

**(Лао-цзы).**

Марста тормош бар, тигәнде Айҙан ҡолап төшкән кеше генә раҫлай алыр...

**(И. Шевелев).**

Әгәр ҙә бер туҡтауһыҙ киләсәк тураһында уйлайһың икән, ғүмер уҙғанын һиҙмәй ҙә ҡалырһың.

**(Т. Карлейль).**

Ахмаҡлыҡ - байлыҡ ул. Ул матур ҡатын-ҡыҙҙарға һәм бай ир-егеттәргә генә тәтей торған ҡиммәт.

**(У. Джеймс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ батшаға ҡарсыға ҡошсоғон тотоп килтерәләр. Батшаның хеҙмәтсеһе ҡошсоҡто тәрбиәләп үҫтерә, ләкин осорға өйрәтә алмай. Ҡарсыға ҡошсоҡ сағында уҡ ҡундырылған ағас ботағынан айырылырға теләмәй, тик кенә ултырыуын белә. Батша йыш ҡына хеҙмәтсеһенең башҡа ҡоштарҙы осорға өйрәтеүен, ә был ҡарсығаны урынынан ҡуҙғата алмай яфаланыуын тәрәнән күҙәтеп ултыра. Хеҙмәтсеһен йәлләп китә бер саҡ батша һәм илгә хәбәр ебәрә: кем дә кем ҡарсығаны осорға өйрәтә... Иртәгәһенә иртән тәрҙә аша ҡарсығаның осоп йөрөгәнен күргән батша был мөғжизәне тормошҡа ашырған кешене эргәһенә килтерергә бойора. Бер крәстиән икән ул. "Һөйлә, һин нисек ҡарсығаны осорға мәжбүр иттең?" ти уға батша. "Уның бер ауырлығы ла булманы, батшам, - ти крәстиән. - Мин ҡарсыға ултырған ботаҡты бысып ташланым. Шунда ҡарсыға үҙенең ҡанаттары барлығын аңлап, осоп китте..."**

**Ә бит кешеләр ҙә шулай. Берәүҙәр үҙҙәрендә ҡанат барлығын белмәй, ултырған ерендә ултыра бирә. Тормош ошо ғәҙәт ботағын һындырып ташлаһа ғына улар ҡанаттары барлығын иҫкә төшөрә һәм осоп китә. Икенселәренең бөтөн нәмәһе бар, улар бына шул булғанды юғалтырға теләмәй, бер урында ултыра ла ултыра. Бәлки, улар ултырған ботаҡты ла бысырға кәрәктер, улар ҙа осоуҙың ни икәнен татып ҡарарға тейештер бит? Ҡайһы саҡта тәүҙә бик насар булып тойолған көтөлмәгән ваҡиғаларҙың да осоу мөмкинлеге биреүе ихтимал бит. Осайыҡ!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 898